# ҺӘНӘК

1

ҒИНУАР ✦ 2009

БЫЛ ҺАНДА:

ЗӘХМӘТЛЕ ПЛАЩ 5-се бит

БАТША САБАТА КЕЙӘМЕ? 6-7-се биттәр

Мәрәкәләр, көләмәстәр, һынамыштар




**– Кеше йыл буйы көтә, ә һин сиратһыҙ үтергә теләйһеңме?**

– Человек ждёт с прошлого года, а ты хочешь пройти без очереди?

✦ *Баш мөхәррир мөнбәре*

# Кемгә – һыйыр, кемгә – үгеҙ

Карапҡа һыу инә башлағас, уны ташлап ҡасҡан сысҡан кеүек, финанс-иҡтисади кризис тулҡындары донъяны дер һелкеткән ваҡытта Сысҡан йылы ла тарих төбөнә төшөп китте. Яңы йылға аяҡ баҫтыҡ.

Һыйыр йылы тип йөрөтәләр уны. Үгеҙ йылы тип тә әйтәләр. Хәйер, беҙҙең өсөн барыбер – үгеҙ ни, һыйыр ни. Икеһе лә ярай. Һәр хәлдә сысҡан түгел.

Борон-борондан халҡыбыҙ һыйыр менән үгеҙҙе үҙ иткән, яҡын күргән. Береһен һауған, икенсеһен екkән. Юҡҡа ғынамы ни ата-бабаларыбыҙ:

– Ишек алдыңда һыйырың булһа, табыныңда майың булыр, – тигән.

– Һыйыры барҙың һыйы бар, – тип тә өҫтәгән улар.

Ниндәй хаҡ һүҙҙәр! Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә шул.

Әлбиттә, һыйырлы кеше – һыйлы кеше. Тик шуныһы бар: һыйырға ҡоро һыу биреп, һөт көтмә. Әлеге Һыйыр йылында был хәҡиҡәтте бигерәк тә ныҡ иҫтә тоторға кәрәк.

“Ағиҙелдең арьяғында бер энәгә бер һыйыр”, – тигәнгә ышанып, бәхет эҙләп, сит яҡтарға сығып киткән ағай-энеләребеҙ байтаҡ. Ашаған еренә һыйыр ҙа ҡайта, тигәндәй, олоғайған көндәрендә тыуған яғына хәйерселәр генә түгел, байҙар ҙа әйләнеп ҡайта. Ә беҙ ундайҙарға ауыр һүҙҙәр әйтмәй генә үҙебеҙҙең бәхетебеҙҙе үҙ еребеҙҙә табайыҡ. “Үгеҙем юҡ урамда, ҡайғым юҡ буранда”, йәки: “һыйырым юҡ кәртәлә, ҡайғым юҡ иртәгәлә”, – тип йәшәүҙә, дерәҫәрәге, йән аҫрауҙа фәтүә юҡ. Кемдер мөгөҙ тотҡан, кемдер һыйыр һауған заманда үгеҙ мөгөҙөндәге себен һымаҡ ҡыланмайыҡ. Юғиһә...

Һыйыр тулап ат булмаһа ла, үгеҙ тулаһа, арба вата. Заманында тәртәнән сыҡҡан ил хужалары күпте ватты, күпте емерҙе. Етер! Төҙәтергә, төҙөргә ваҡыт. Шуға күрә ҡыҫыр һыйырҙы быҙаулаттырмай ғына үгеҙҙе мөгөҙөнән эләктереү мәслихәт. Үгеҙ йылы беҙҙән үгеҙ кеүек егелеп эшләүҙе көтә.

Яңы йыл төклө тоғы менән килһен.

Һыйыр + Үгеҙ йылы ҡотло булһын!





А. ВАСИЛОВ


М. ЛАРИЧЕВ


Ш. ИСЛАМОВ

# Яңы йыл сәләмдәре

## Ҡайнар йөрәкле шағир

Рауил Бикбаевҡа

*Үткер һәр бер һүҙең дә,*
*Нурлы һинең йөҙөң дә.*
*Оскон уйнай күҙеңдә –*
*Ысын егет үҙең дә!*
*Ауырлыкка бирешмәйһең,*
*Ғәйбәттәргә ирешмәйһең –*
*Һин сыҙам да, түҙем дә.*
*“Кышын тыуғанға шулайҙыр”,*
*Тип күп кеше уйлайҙыр.*
*Шағирҙың кайнар йөрәген*
*Хатта һалкын Ҡыш бабай ҙа*
*Һис һыуыта алмайҙыр.*

## Һыуһыҙ ҙа ярай

"Ағиҙел" журналына

*Ағиҙел һыуҙары алкын,*
*Ағиҙел һыуы һалкын.*
*Шул һыуҙарҙы эсә-эсә*
*Кинәнес ала халкым.*

*Ҙур йылғаның сифаттары*
*Журналыбыҙға карай.*
*Тик "Ағиҙел" баҫкан әҫәр*
*Һыуһыҙ булһа ла ярай.*

## Бер бабай ҙа калмаһын

"Йәшлек" гәзитенә

*"Йәшлек" йәштәр гәзитенең*
*Баш мөхәррире Артур:*
*– Беҙгә шәп әҫәр яҙһалар,*
*Тиражыбыҙ, – ти, – артыр.*

*Яҙыу ғына аҙ булыр шул,*
*Яҙылыу уға кәрәк.*
*"Йәшлек"кә яҙылыр өсөн*
*Ашкынып тибә йөрәк.*

*"Йәшлег"ебеҙ бына тигән –*
*Халык шуны аңлаһын.*
*Был гәзиткә яҙылмайса*
*Бер бабай ҙа калмаһын!*





## Бил бирмәҫ

"Өмет" гәзитенә

*“Һинең йәшең – үҫмер йәше”,–*
*Тип әйтмәйбеҙ "Өмет"кә –*
*Матбуғат майҙанындағы*
*Бил бирмәҫ был егеткә.*

## Һай, тылсымлы!..

Башҡортостан китап палатаһына

*Һай, тылсымлы палата –*
*Бөтәһен дә карата.*
*Укый белгән ир-аттар*
*Уны үлеп ярата.*

Яңы йыл сәләмдәрен тапшырыусы **И. ҒӘРӘФИ.**





– Быйыл мин һеҙҙе мөгөҙөгөҙҙән алырмын!
– В этом году я вас возьму за рога!

С. КИЯШКО

## Сәнскеле сәләм сәпәп

# Боҙ йомортҡа

Хоҙай насип иткәс, тауыҡтың боҙ йомортҡа һалыуын да күрергә насип яҙҙы.

Степан Кувыкин урамының 29/1-се һанлы йортондағы “Йәрминкә” исемле аҙыҡ-түлек магазинына йыш йөрөйөм. Күптән түгел ошо кибеттә тауыҡ себеше алдым. Ҡайтыу менән уны уртаға ярҙым һәм ни күрәм, эсенән ҡаҙ йомортҡаһы ҙурлығында оҙонса нәмә килеп сыҡты. Ҡулыма алғас, ул ирей башланы. Бәй, боҙ икән! Тиҙ генә боҙ йомортҡаны һауытҡа һалдым да туңдырғысҡа ҡуйҙым. Торараҡ алып үлсәнем – 113 грамм тартты. Магазинға кире киттем.

– Ниңә ит хаҡы менән боҙ һатаһығыҙ? – тинем магазин мөдиренә.

Ханым аптыраманы, күрәһең, бындай хәл менән таныштыр.

– Был тауыҡтар сит өлкәләрҙән килтерелгән, ныҡ туңдырылған, – тине ул күҙ ҙә йоммай. – Ә һеҙ Башҡортостан тауығын алығыҙ, улар һәйбәтерәк.

22 ноябрҙә тағы ла ошонан үҙебеҙҙең “Турбаслы бройлерҙары, 1-се сорт, хәләл”, тип яҙып төрөлгән себеш алдым. Өйгә ҡайтҡас, себеште иреттем, эсенән оло стакан тулы һыу сыҡты. Етмәһә, ҡаптың башы йыуан әлумин сым менән бәйләнгән.

Тимәк, ҡулланыусы бер тауыҡ алғанда байтаҡ аҡсаһын юғалта. Бындай магазиндар күп. Ошондай хәл менән дәүләт инспекцияһы ҡыҙыҡһыныrға тейештер тип уйлайым. Тауыҡтың эсенә һыу һалып ҡайҙа туңдыралар? Һыу, төргәктәге сым ауырлығы нисек иҫәпкә алына икән?

**Әнүәр ТУҠТАМЫШЕВ,**
тыл һәм хеҙмәт ветераны.

## Ғибрәт өсөн

# Әллә күрә алмайҙар...

*Беҙҙең халыҡ ҡыҙыҡ бит ул. Нимә генә ҡылһаң да кирегә юрарға, унан йөй табырға, сәйнәшергә әҙер торалар. Күңеленә ятышлы эш тапмай йөрөһәң дә, – һин улар өсөн аҙыҡ. Имеш, теге лә был, ата ялҡау, теләгән кешегә эш бөткәнме ни. Шунан бөтә нәҫеләңде аҡтара башлайҙар. Берәй йүнен күреп, ғаиләмде ҡарайым тип тырышып, инде арыу ғына аҡса таба башланыңмы, барыбер нимәһендер соҡоп сығарып, бәйләнеп эт итәләр. Хатта бөтөнләй таныш булмаған әҙәмдәрҙең дә һинең менән булашыуы аптырата. Шундай тар күңелле кешеләр булыр икән. Әллә көнләшәләр, әллә күрә алмайҙар, аңламаҫһың.*

*Әнә, Андрей Соколовты ниндәй хәлгә төшөрҙөләр һуң!*

*Ул Өфө егете, 30 йәштә, йәғни донъяһын шаулатып, йәшнәп йәшәр сағы. Һәм ул шулай булырға ынтыла ла. Берәй ерҙә эшләүҙе күҙ алдына ла килтермәй. Көнө буйы*




Р. ЮНЫСОВ

*хәйерсе аксаһына кейем туҙҙырып йөрөргә башына тай типмәгән!*

*Андрей наркотик һатыу кеүек утә төшөмлө кәсепте һайлай. Күңел һалып, дәртләнеп тотонғас ни, егеттең эше көйлө бара. Бактиһәң, арабыҙҙа наркотикты тәмләп карарға теләүселәр бихисап икән. Тик шул әлеге лә баяғы тар күңелле әҙәмдәрҙең темеҫкенеп йөрөүе генә уның уңышлы барған эшмәкәрлеген селпәрәмә килтерҙе.*

*Ысынлап та, эшкыуарҙың табышы башкаларҙы көнләштерерлек шул. Тикшереүселәр уның теүәллегенә, бөхтәлегенә, зирәклегенә шак ката. Хатта күптәр өсөн йығып сыға алмаҫлык кара урман кеүек күренгән бухгалтерия, иҫәп-хисап нескәлектәрен дә ул биш бармағы кеүек белә. Махсус дәфтәрендәге «табыш», «сығым», «калғаны» тигән яҙыуҙар шул турала һөйләй. Ә килем тураһында әйтәһе лә түгел. Бөтмөр егеттең кеҫәһенә көн дә бер нисә мең һум төшөп торған.*

*Наркотиктар тикшереү хеҙмәткәрҙәре төпсөр халык бит. Егеттең ни рәүешле былдай уңышка өлгәшеүенең сере менән кыҙыкһынды. Әлбиттә, Андрей тәүҙә уны асырға теләмәһә лә, һуңынан бөтәһен дә бәйнә-бәйнә һөйләргә мәжбүр булды. Фатирындағы героин төргәктәре, башка нәмәләр уның эшмәкәрлегенең ни тиклем һөҙөмтәле барыуы тураһында дәлилләй ине. Ахырҙа уға:*

*– Былдай тырышлығың менән рәшәткә артында ял итергә тулыһынса хокуғың бар, – тине тәртип һаклау хеҙмәткәрҙәре.*

*Андрей Соколов башын тотто: “Инде ни эшләргә?”*

*Әллә көнләшәләр, әллә күрә алмайҙар инде...*

**И. ХАҠОВ.**

## ✦ Мәҙәк мәлдәр ☺☺☺☺☺☺☺☺

# Аҡ плащ

Салауат башҡорт дәүләт драма театрында эшләгән саҡ. Баҡалы районында гастролдә йөрөйбөҙ. Спектаклдән һуң минең тыуған көнөмдө үткәрергә яланға сыҡтыҡ. Артистар балыҡ тотоп, уха бешерҙеләр. Табында сәйе лә, мәйе лә бар. Дуҫтар матур тостар әйттеләр, электр ҡырынғысы бүләк иттеләр. Йылы һүҙҙәрҙән, сәйҙәнмәйҙән иҫереп, йылға ярына барып ултырҙым. Минән алыҫ түгел урынға Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рафаил ағай килеп баҫты, ҡулына аҡ плащ тотҡан. Ул йылғаға ҡарап торҙо ла плащын ағын һыуға ырғытты. Мин аптырап ҡалдым. Әллә күҙемә күренәме? Әллә саманан тыш иҫереп киттеме? Улай тиһәң, Рафаил ағай шарап менән шаяра торған кеше түгел. Ул тартмай ҙа, эсмәй ҙә.

– Ни булды ағай? – тип һорайым.

– Әй, энекәш, әйтһәң һүҙ, төртһәң күҙ тигәндәй, был плащтан әллә ҡасандан ҡотола алмайым. Бынан утыҙ йыл элек һатып алғайным уны. Йә туҙманы, йә юғалмай. Ул туҙмағас, яңыны алып булмай. Шул тиклем туйҙым үҙенән. Бынан ун йыл элек уны маршрут автобусында ҡалдырып киткәйнем. Йәнәһе, ҡотолдом. Шатлығым оҙаҡҡа барманы. Икенсе көндө шофёры мине ҡунаҡхананан эҙләп табып, плащты ҡулыма килтереп тотторҙо. Икенсе ҡалала уны ҡунаҡханала «оноттом». Бер тәүлек тә үтмәне милиция килтереп бирҙе. Аптырағас, шул нәмәкәйҙе сәхнә артында ҡалдырып, гастролде тамамлап ҡайтып киттек. Бер аҙнанан өйгә бандероль килеп төштө. Уның эсендә аҡ плащ ине. Асыуымдан хатта иланым. Былдай хәлдәр бик күп ҡабатланды. Бына хәҙер, энекәш, ҡотолдом инде. Бәлки, диңгеҙгә тиклем ағып китер. Хуш, плащҡайым!

Миңә ошо хәлдәрҙе һөйләне Рафаил ағай.

Икенсе көндө ауыл клубында спектакль ҡуйырға әҙерләнәбеҙ. Гримёрныйға бер ағай килеп инде лә:

– Һаумыһығыҙ, артист ағайҙар. Кисә йылғала балыҡ һеҙгәндә йөтмәгә ошо әйбер килеп эләкте, һеҙҙеке булырға тейеш, – тип ҡулындағы төргәгән тағата башланы. Унан аҡ плащ килеп сыҡты...

**Булат ЙЫҺАНУРОВ.**
Дыуан районы.



Марат КӘРИМОВ

# Падишаһҡа–сабата

Хыялый хикәйә

– Әй, кем! Исемеңде кем тип әйтәйем, туҡта әле бер минутҡа. Һорауым бар. Ауылығыҙҙа музей бармы? Булһа, берәй пар сабата табып алырға ине. Нисәмә ауылда булдым, береһендә лә юҡ. Хатта бәләкәй балалар: “Нимә ул сабата?”– тип һорайҙар. Ярай әле өлкән йәштәге бер ҡарт: “Булһа, шул музейҙа булыр инде ул”, – тип өйрәтеп ебәрҙе. Ниңә кәрәк булды ул сабата, тиһеңме? Сер түгел, әйтәйем инде. Падишаһҡа кәрәк. Нимә, беҙҙә падишаһ юҡ, беҙҙә президент ҡына бар, тиһеңме? Мин боронғо кеше, ул президент тигән һүҙеңде бик аңлап еткермәйем. Падишаһ хәҙер һеҙҙә шулай тип йөрөтөләләр, күрәһең. Мин бит был илдең падишаһы тип әйтмәйем, үҙем булған илдең падишаһы тураһында һүҙ алып барам. Ҡайҙан килгән был наҙан, тиһеңме? Әллә ҡайҙан түгел мин, ошо яҡтыҡы. Тик был яҡтарҙан сығып китеүемә биш былтыр. Ниңә киттең тип ни, шул бер аҙ сауҙа итеп, байып булмаҫмы, тигәйнем дә. Тик нәмә менән сауҙа итергә? Уйлап-уйлап торҙом да сабатаға туҡталдым. Беҙҙә бит сабыйҙар ҙа бишектә саҡта



уҡ сабата үреп, сабата ҡайтарып ята торғайнылар. Бер тоҡ сабата күтәреп, сит яҡтарға юлландым. Әммә алыусы табылмай. Сабатаны үҙҙәре яһайҙар икән. Сабатаға мохтаж кешеләрҙе эҙләп, әллә күпме илдәр үтелгән. Бара-бара юлда арҡаһына минең һымаҡ тоҡ аҫҡан бер мосафирға тап булдым. Һөйләшеп-танышып киттек. Афанасий Никитин тигән урыҫ булып сыҡты был. Ул да сабата менән һатыу итергә сыҡҡан икән. Тик уның сабаталары алты йүкәнән, ә минеке ете йүкәнән үрелгән. Шулай һөйләшеп-гәпләшеп илдәр ҡыҙыра торғас, юл икегә айырылған ергә килеп туҡталдыҡ. Шул юл сатында әкиәттәрҙәгесә таш тора. Ташҡа “Уңға китһәң дә уңырһың, һулға китһәң дә уңырһың”,– тип соҡоп яҙылған. Ҡайһы юлдан китергә тип баш ҡашып торғанда, Афанасий знакум әйтте: “Әйҙә, икебеҙ ике яҡҡа китәйек. Һатыр тауарҙарыбыҙ ҙа бер иш. Бер-беребеҙгә ҡамасауларбыҙ”, – ти. Шулай тине лә уң яҡ юлдан китеп күҙҙән юғалды. Мин уны башҡаса осратманым. Әле күптән түгел генә белдем: ул үҙ иленә иҫән-имен ҡайтып, сәйәхәттә күргәндәрен китап итеп яҙып сығарған икән. Уҡығаның барҙыр, “Хождение за три моря” тип атала. Мин дә уҡып сыҡтым уны. Тик минең менән бергә сәйәхәт итеп йөрөгәндәрен бер ҙә яҙмаған. Шуға хәтерем ҡалды. Туҡта, туҡта, ниңә ышанмайһың? Ул ун алтынсы быуатта йәшәһә ни. Мин дә бит шул быуаттан. Кеше шулай оҙон ғүмерле буламы ни, тип аптырама. Була икән шул. Башта һөйләп бөткәндә көт, унан әйтерһең.

Бына шулай илдән-илгә йөрөй-йөрөй һатырға тип алған сабаталарымды үҙем туҙҙырып бөттөм. Әммә бер парын янға ҡалдырҙым. Белмәҫһең, бик кәрәге тейеп ҡуйыуы бар. Һәм шулай булды ла. Бер саҡ шулай таш юлдан ялан аяҡ һыпыртып китеп барғанда ағас ҡылыс тотҡан һаҡсылар туҡтаттылар ҙа, ҡул-аяғымды бәйләп, үҙҙәренең падишаһтары алдына килтереп баҫтырҙылар.

– Беҙҙең бәхетле илгә әллә ниндәй бәндә килеп керҙе. Нишләтергә бойораһығыҙ?

Падишаһ башта минең ҡайҙан, кем икәнлекте һорашты, унан тоҡтағы сабатаны күреп ҡалды ла, әйләндереп-әйләндереп ҡарағандан һуң:

– Был нимә? – тип һорап ҡуйҙы.

– Был, – мин әйтәм, – беҙҙең яҡ батшаларының төшөнә лә кермәй торған аяҡ кейеме. Сабата тип атала.

Падишаһ сәмле кеше булып сыҡты.

– Әһә! Уларҙың төшөнә лә кермәгән ул сабата тигән кейем минең аяҡта булһын әле! – тип төрлө ҡиммәтле таштар менән семәрләнгән ситеген һалып бәрҙе лә әлеге сабатаны кейеп, яңынан тәхетенә барып ултырҙы. Һәм ҡәтғи әмерен бирҙе:

– Бәхет өләшеү министры ҡайҙа?

– Мин бында, баш өҫтө!

– Был бәхетһеҙ сит ил ҡунағын хәҙер үк бәхетле итегеҙ. Бәхетле булһа, иленән сығып китмәҫ ине.

“Былар мине нисек бәхетле итергә йыйыналар икән, алтынкөмөш менән күмергә уйлайҙар, ахыры”, – тип баш ватып торғанда, әлеге бәхет өләшеүсе министр ҡулыма “Фәлән Фәләновты бөгөндән бәхетле тип иҫәпләргә”, тигән яҙыу тотторҙо. Аҙаҡ белдем, шундай уҡ яҙыуҙар батшалыҡтағы бар кешеләргә лә тапшырыла икән. Шул ҡағыҙҙы уҡып, улар үҙҙәрен сикһеҙ бәхетле итеп тойорға тейештәр. Шундай приказ. Кешеләре бәхетле булғас, ил дә бәхетле була. Ил бәхетле булғас, уның падишаһы ла бәхетле. Шулай түгелме?

Бәхетле иткән ҡағыҙҙы тотоп

сығып барғанда бәхетле илдең бәхетле падишаһы яңы әмерен яңғыратты:

– Ҡайҙа ҙурлау министры? Мин был мосафирға тағы бер изгелек эшләргә булдым. Миңә сабата тигән аяҡ кейеме бүләк иткәне өсөн үҙенә ҙурлау грамотаһы тапшырығыҙ. Йөҙө бик таушалған күренә, етмәһә ҡарттар кеүек бөкөрәйгән дә (унығыы инде тоҡ аҫып йөрөүҙең бәләһе), йәшәртегеҙ үҙен берәй ун йәшкә!

"Йә Хоҙа, быларҙа медицина шулай алға киткәнме икән ни?"– тип ғәжәпләнеп торғанда, ҡулыма бығау тиреһе менән тышланған әлеге ҙурлау грамотаһы тигән нәмәкәйҙәрен һондолар. Эсендә: "Ҙурлау грамотаһы тапшырылыу айҡанлы фәлән иптәште ун йәшкә йәшәргән тип иҫәпләргә",– тигән яҙыуы бар.

Был илдә Ҙурлау министрлығы ғына түгел, Хурлау министрлығы ла бар икәнен белдем. Уның министры дәүләттәге тәртиптәр менән риза булмаусыларға хурлау грамоталары тапшыра икән. Ҙурлау грамоталары кешеләрҙе йәшәртһә, хурлау грамоталары, киреһенсә, ҡартайта. Шул ысул менән яза алған берәү миңә "Егерме йәшлек Фәлән Фәләнов ҡырҡ йәшкә ҡартайған тип иҫәпләнә", тигән яҙыулы хурлау грамотаһын күрһәтте. Эш эҙләп йөрөй ине. Ә бында алтмыш йәшлек кешене бер ҡайҙа ла эшкә алмайҙар, хатта төнгө ҡарауылсы итеп тә. Ә алтмыш йәштән һуң бирелә торған пенсияны уларҙың ҡулына тоттормайҙар, быяла аша күрһәтеп кенә алалар. Астан хет ятып үл. Хәйер, үлтермәйҙәр бында. Йән биргән кешене "Теге донъяла тере тип иҫәпләргә", тигән ҡарар тоттороп, ҡәбергә күмәләр. Был эштәр менән Ҡурҡытыу министрлығы шөғөлләнә. Бынан башҡа ла уның эштәре бихисап. Исеме әйтеп тора бит.

Бына шундай ғәжәп хәлдәр күп күрҙем мин был мәмләкәттә, энекәш. Әйтһәм, ышанмаҫһың, ярлылар бында бай, ә байҙар – ярлы. Башҡа һыймай, тиһеңме? Уның сере бик ябай: дәүләт ҡарары менән ярлы бай тип иғлан ителә, ә бай – ярлы тип. Әммә һәр кем үҙ мөлкәте менән ҡала. Шул ҡарар буйынса һалымды әлеге ҡағыҙ байҙарҙан түләтәләр. Ҡағыҙ ярлыларҙан һалым алыу юҡ. Бына шундай ғәҙеллек хөкөм һөрә.




Әйтергә онотҡанмын икән, бында иң мөһим министрлыҡ – Маҡтау һәм маҡтаныу министрлығы. Ул ал-ял белмәй эшләй: көнө-төнө падишаһты, шул падишаһ биргән матур тормошто күккә күтәреп маҡтау менән мәшғүл. Шуғалырмы, һеҙҙеңсә әйткәндә, уның рейтингы көндән-көн артып тора. Һәр хәлдә гәзиттәр шулай тип яҙалар. Был ысынлап та шулайҙыр ҙа. Дәүләт башындағы кеше сабата кейеп тәхеттә ултырһын әле, абруйың артмаҫ ерҙән артыр.

Сабатаны әйтәм, оҙаҡҡа сыҙамай бит ул. Падишаһтың сабатаһы ла тишелеп сыҡҡан. Шуға мине ярандары аша үҙенә саҡыртып алды.

– Яңыһын тап! – ти. Тыуған илгә ҡайтып алып килергә ҡуша.

– Минең тыуған яҡ ете диңгеҙ, ете даръя, ете тау артында ята. Унда ҡайтып кире килеү өсөн был ғүмер етерме икән? – тигән шик белдерҙем.

– Һи-и-и! Уныһы беҙгә проблема түгел, хәҙер үк ғүмереңде оҙайтабыҙ уны. Күпме кәрәк, шул тиклем. Әй, министр, хәҙер үк яңы ҙурлау грамотаһы әҙерлә!

Мин, "Дәүләтебеҙҙең донъяла иң аҡыллы, иң зирәк, иң гүзәл падишаһына тәхеттә кейеп ултырыу өсөн яңы пар сабата алып килгәнсе Фәлән иптәштең ғүмере оҙайған тип иҫәпләргә", тип яҙылған ҙурлау грамотаһын тоҡсайға һалып, шул көндө үк ҡайтыр юлға сыҡтым. Сығыуын сыҡтым да ул, әммә ҡайтыр юлды таба алмай әллә нисә быуат аҙашып йөрөлдө. Бик йыраҡҡа киткәнмен икән шул. Ярай иҫән-һау ҡайтып төштөм, шөкөр.

Инде бына шул сабата табыу мәшәҡәте менән йөрөп ятҡан көн. Кире ул мәмләкәткә бармаһам да була ла һуң, биргән вәғәҙәне боҙаһы килмәне. Әһә, музейығыҙ ошо буламы? Ярай, рәхмәт алып килгәнеңә. Алла бойорһа, иҫән ҡайтһам, ошо сәфәрҙәрҙә күргәндәрем тураһында берәй китап яҙырмын тип торам. Тик теге Афанасий знакумды ҡыҫтырмайым. Ҡунаҡ ашы – ҡара-ҡаршы...

Кәбир АҠБАШ

# Күрһәтермен әле!..

Хамраш Мөртиев былай ҡарап тороуға насар егет кеүек түгел, өҫтө-башы бөтөн генә күренә, теле йомшаҡ һымаҡ. Теле йомшаҡ тигәндәй, үҙен ул күпте белгән итеп ҡупырайтып һөйләп, үҙреклама яһап алыуҙан да тартынмай. Әйтәйек, кентавр тигән атама ҡайҙан пәйҙә булған, йә, булмаһа, ниңә Айҙағы Зөһрә-ҡыҙҙың көйәнтәһе ватыҡ күренә, ә бына Помпей ҡалаһын ниндәй вулкан йотҡан? Һәм башҡалар, һәм башҡалар... Кейемендә, телендә хикмәт ябай кеүек кеүеклеккә, тик ниңәлер Хамраш бер ҡайҙа ла кешеләр менән һыйышып эшләй алмай. Белеме бар, дипломы бар, ә эшләй алмай. Уҡытыусы булып эшләп ҡараны, тик уға мәктәп стеналары тар күренде. Уның директор булғыһы килде. Быны ишетеп, ҡала мәғариф бүлеге начальнигы Хамрашты үҙенең бүлмәһенә саҡырып алды.

– Әгәр ҙә һине директор итеп үрләтһәк, эште нимәнән башлар инең? – тигән һорау бирҙе ул.

Хамраш оҙон-оҙаҡ уйлап торманы, йомшаҡ телле булып күренергә тырышып:

– Уҡытыусы Фәхриеваны эштән ҡыуыр инем, – тине.

– Бәй, бәй, – тип ғәжәпләнде мөдир. – Ул педагогик белем биреү отличнигы, хатта миҙал менән бүләкләнде. Педколлектив та, уҡыусылар ҙа уны ярата, нисек инде ҡыуырға?

– Сөнки ул Зөһрә йондоҙҙоң көйәнтәһе ниңә ватылғанын да белмәй. Хатта Везувий вулканының Помпей ҡалаһын...

Өҫтәлдә телефон шылтыраны. Хужа трубканы алды ла:

– Хәҙер, хәҙер! – тине. – Бына, минең янға ингән уҡытыусы менән аңлаштыҡ. Уны оҙатам да...

Хамраш, сығып китеүҙән башҡа сара булмауҙы аңлап, туғыҙға бөкләнеп мөдиргә баш эйҙе...

Шунан һуң ул:

– Журналист булам! – тип ҡарар итте һәм телевидение мөхәрриренең







А. САЙРАНОВ, М. ЛАРИЧЕВ, Р. ЮНЫСОВ һүрәттәре.



бүлмәһенә килеп керҙе. Ингәс, текә генә иҫәнләште лә үҙе менән таныштырҙы:

– Хамраш Мөртиев. Белемем – юғары, һөнәрем – педагог. Мәктәп директоры итергә ҡоҙалайҙар, тик минең журналист булғым килә.

– Гәзит-журналдарға яҙышаһығыҙмы? – тип һораны мөхәррир.

– Яҙышам, ә как же, – тине Мөртиев. – Әле бер мәҡәлә яҙғайным, шуны бер нисә гәзиттә, унан журналдарҙа баҫтырҙым.

– Ә ниңә бер үк әйберҙе әллә нисә гәзиттә баҫтырҙығыҙ, был килешә торған эш түгел бит, – тип әйтеп ҡуйҙы мөхәррир.

– Әле китапҡа ла индерәм әле! – тип фәстерҙе Хамраш.

Телевидение редакторы күҙлек аша уға ҡарап ҡуйҙы ла:

– Беҙҙәге ниндәй тапшырыуҙар оҡшай, нимәләр өҫтәп әйтә алаһығыҙ? – тип һораны.

– Һеҙҙең йыр-моңдар оҡшай. Бигерәк тә һорауҙар буйынса биргән йырҙар.

– Яҡшы, – тине мөхәррир. – Бына, йыр һораған бер хат. Шуға матур ғына аңлатып, ниндәй йыр һайлар инегеҙ?

Хамраш хатты уҡып сыҡты ла яҙырға ултырҙы... “Беҙҙең алда тағы ла бер хат. Уны һикһән йәшлек ҡарсыҡ яҙған. Уға йыр тапшырмау мөмкин түгел. Ул киң күңелле ҡортҡа. Хатта мөхәббәткә тоғро була белә. Төшөндә гел бынан ун йыл үлгән ҡартын ғына күрә, хыянат итмәй. Иртән үҙе тора, үҙе йөрөй, бәҙрәфкә лә үҙе бара...” – тип теҙҙе ул. Шунда уны мөхәррир бүлдерҙе:

– Ҡотлау һүҙҙәре бик оҙон булмаһын. – Ҡыҫҡа, мәғәнәле булһын. Аҙаҡ, бәлки, берәй шиғыр ҙа өҫтәп ҡуйырһығыҙ.

Хамраш шунда уҡ шиғыр яҙҙы:

**Ағиҙелдең өҫтәрендә**
**Ҡыҙыл тауыҡ йөҙәлер.**
**Һикһән йәшкә етһәм дә,**
**Төшөмдә һине күрәм.**

Уны тағы ла мөхәррир бүлдерҙе:

– Ниндәй йыр һайлар инегеҙ, шуны ла әйт.

– Аңланым, – тине Хамраш һәм аҡҡа ҡара менән өҫтәп ҡуйҙы: “Тәҡдир ҡырыҫ, әжәл килер... Хызыр Ильяс һығып алыр... Донъяны ҡалдырып китеүе булыр”...

Мөхәррир быларҙы уҡып ҡараны ла:

– Ҡыҙыҡ! – тине, ауыҙын серле сырлатып. – Тик, дуҫҡай, һикһән йәшлек инәйең быны ишетеп донъя ҡуйыр бит! Әммә ләкин беҙҙең кешеләрҙе үлтергебеҙ килмәй. Ярай, Хамраш Мөртиев, үҙең ғүмерле бул!

Мөртиев өмөтөн өҙөп сығып китте. Ләкин хәҙер уның мөхәррир кеүек аҡыллы етәксе булғыһы килде. Әммә уны ниндәйҙер бер эске тойғо туҡтатты: “Туҡта, туҡта! Һин ошо йәшкә етеп, бер генә урында ла етәксе булып эшләмәнең бит”...

Юҡ, Хамраш эске тойғоһон аңларға теләмәне һәм бер хәйриә ойошмаһына килеп инде. Бында йыйылыш бара ине. Баҡһаң, ойошмаға етәксе һайлау бара икән.

– Үҙем рәйес булам! – тине Мөртиев. – Һайлағыҙ мине! Белемем – юғары, һөнәрем – уҡытыусы. Фотоға ла төшөрә беләм...

Шунда бер кеше уға һорау бирҙе:

– Әгәр ҙә рәйес булһаң, эште нимәнән башлар инең?

Хамраш йыйылыусыларға ҡарап, күҙ йөрөтөп сыҡты ла:

– Бына бында оло йәштәге ике-өс кеше ултыра,– тине. – Мин уларҙы ерләүҙе ойоштором инем...

Зал өнһөҙ ҡалды. Тәүҙә йыйылышты ташлап, пенсия йәшендәге ағайҙар сығып китте. Уларға ҡалғандар эйәрҙе.

Хамраш залда бер үҙе ултырып ҡалды. Уның асыуы йөҙөнә бөрөп сыҡты. Ул, тештерен шығырлатып:

– Һеҙ кентаврҙы ла, Везувийҙы ла, Зөһрәнең көйәнтәһен дә аңлай торған кешеләр түгелһегеҙ. Мин һеҙгә кемлегемде күрһәтермен әле, – тине һәм ялыу яҙырға тотондо.



# Баязит БИКБАЙҙың тыуыуына – 100 йыл



*Баязит Ғаяз улы Бикбаев 1909 йылдың 19 ғинуарында Башҡортостандың хәҙерге Көйөргәҙе районы Ҡалта ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуа. Башланғыс белемде үҙ ауылында алғас, ул Ташлы профессиональ-техник мәктәбендә уҡый. 1923 йылда Ырымбурҙағы Башҡорт педагогия техникумына инә. Уны тамамлағас, журналистика өлкәһендә эшләй.*

*Б. Бикбайҙың шиғырҙары 1927 йылда баҫыла башлай. “Үтеп барған көндәр” исемле тәүге китабы 1932 йылда сыға. Ике йылдан һуң донъя күргән “Урман артында” тигән икенсе китабы әҙәбиәткә талантлы шағир килеүен раҫлай. Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы йылдарҙа Б. Бикбай шиғриәте тематик, жанрҙар йәһәтенән байый һәм төрләнә бара. Ул – талантлы драматург та, роман (“Аҡселән ташҡанда”), повесть, хикәйәләр авторы ла. “Салауат”, “Шәүрә” опраларының һәм “Ҡоҙаса” музыкаль комедияһының либреттоларын да ул яҙҙы. Әҙиптең балалар өсөн дә байтаҡ шиғырҙары, хикәйәләре бар.*

*Баязит Бикбай башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн “Почёт Билдәһе” ордены менән бүләкләнде. Ул Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.*

**Баязит БИКБАЙ**

### ★★★

***Мөхәббәт төпһөҙ тигәнгә,***
***Ышанманым бер ваҡыт.***
***Бик үҫәр булғанмын икән:***
***Саҡ үлмәй ҡалдым батып!***

*1941.*



## Ҡоҙғон

***Бер ҡоҙғон маҡтанып ҡаҡты ҡанаттар,***
***Күҙ асҡансы түбән ҡалды болоттар.***
***Ҡуяндар ҡурҡышып, ҡыуға һыйынды,***
***Һайрауҙан бар аҫыл ҡоштар тыйылды;***
***Оса ул тыңдәшен тоймай һауала,***
***Түбән ҡалғандарҙы һуҡмай һанға ла...***

***Бына ташҡа сығып йәш ауҫы баҫты,***
***Кереп ҡолас, кереш тартты, уҡ атты.***
***Яҙлыҡманы йәш ауҫы уҡ атыуҙа,***
***Ҡоҙғоноң ҡапланып төштө баҫыуға.***
***Ята ул тырпандап, тын да ала алмай,***
***Көсәнһә лә ҡанаттарын ҡаҡалмай...***

***О, ҡайҙа көс? Ғорурлыҡ ҡайҙа булған?..***
***Хәҙер инде себен дә ҡурҡмай унан!***

*1941.*

## Фрицтың кресы

***Бына ҡулымда тимер крест...***
***Сиркәндергес уға ҡарауы!***
***Күптән түгел уны берәй фриц***
***Тағып йөрөгәндер һауалы.***

***Һәм ирәйеп күкрәген киргәндер***
***Парадтарҙа уҙған саҡында;***
***Ҡатынына, бәлки, һүҙ биргәндер***
***Крест алырмын, тип тағы ла...***

***Яңылышманы фриц, моратына етте:***
***Крест алды, булды ерле лә,***
***Тик ул үҙе... йөҙтүбәнгә китте,***
***Ҡайтмаҫ инде һөйөнөп иленә.***

***Алыҫ Украина ҡырҙарында***
***Урман булып ултыра крестар,***
***Ошо крестарҙың араһында***
***Фрицҡа ла үҫәк крест бар!***

***Ул тын ята. Тик әсе ел өрһә,***
***Ыңрашалар ағас крестар...***
***Әйтерһең дә шөкәтһеҙ Гитлерға***
***Ләғнәт уҡый үлек фрицтар!***

*1942.*

## Ут

*(Шаярыу)*



***Тамам йөҙәттеләр мине,***
***Күҙҙе лә асып булмай,***
***Әллә юрый шаярталар,***
***Әллә ысынлап шулай:***

***– Һеҙҙә ут сыҡҡан икән, – тип,***
***Ҡайғымды бүлешеләр,***
***Таныш түгелдәр ҙә килеп,***
***Уфтанып күрешеләр...***

***Бер нинде ут сыҡҡаны юҡ,***
***Ҡайҙан алдылар икән?***

*Әллә йөрәгем ялҡынланып,*
*Тышҡа сағыла микән?*

1944.

## Ҡаты ауырығанда

*Салҡыны шыр һөйәк ҡарсыҡ*
*Яҡында ғына йөрөй,*
*Бала алдатҡан шикелле,*
*Күрмәгән була юрый...*
*Әллә ялыныр ти микән?*
*Бик иҫем китте бына:*
*Йәшәр өсөн тыуған кеше –*
*Үлер өсөн дә тыуа.*
*Намыҫлы үтелде ғүмер,*
*Эшләнде эшләйһе эш,*
*Илап донъяға килеүсе*
*Көлөп китергә тейеш.*
*Ауырлыҡтар ҙа күрелде,*
*Биҙмәнем тик донъянан,*
*Мин ерҙе һөйөп туйманым,*
*Шуны ғына ҡыҙғанам!*

1957.

## Телефонсы ҡыҙ

(Шаярыу)

*Мин телефонсы бер ҡыҙҙы*
*Бигерәк янып яратам,*
*Эс серемде асыр өсөн,*
*Көн һайын шылтыратам.*

*Оҙаҡ-оҙаҡ шылтыратам,*
*Телефоны буш түгел.*
*Әллә телефон буш түгел,*
*Әллә үҙем иш түгел?..*

*Номерҙарҙы йыя-йыя*
*Шыбыр тир булып бөтәм,*
*Трубканы ҡуймайынса,*
*Яуап көтәм дә көтәм...*

*Телефоны, телефоны*
*Ҡасан буш булыр икән,*
*Беҙҙең ҡайнар йөрәгебеҙ*
*Бергә ҡушылыр икән?..*

*Телефоны бушамаһа,*
*Сыбыҡтары өҙөлһөн,*
*Әйҙә, ҡыҙҙың да йөрәге,*
*Минекеләй, теленһен!*

1957.

***

*Мөхәббәт – йәшәү емеше –*
*Өлгөрә ул бер генә,*
*Кеше татый уның тәмен*
*Тик бер генә ғүмергә.*

*Әгәр һөйөү татымаһа,*
*Ул – кеше булмаҫ инде,*
*Донъяның иң гүзәл йәмен*
*Бер ҡасан тоймаҫ инде...*

*Ергә тыуған һәр бер кеше*
*Ҡаса алмай үлемдән...*
*Ә мөхәббәт татымаусы –*
*Тере килеш күмелгән!...*

1961.



## Булмам самаса

*– Самаса ғына йәшә, дуҫ,*
*Самаса ғына эшлә,*
*Күптән егет сағың үткән,*
*Хәҙер һин илле йәштә...*

*Шундай кәңәш биреүселәр*
*Күбәйеп китте, ай-бай,*
*Хатта оло аҡыл бирә*
*Башы самалы ағай.*

*Самаса ғына йәшәһәм,*
*Самаса ғына яҙһам,*
*Минең өсөн булыр инде*
*Тормош самаһыҙ арзан.*

*Атаҡаға барған һалдат*
*Самаса булалыр шул?*
*Самаса ғына һуғышһаң,*
*Еңеүҙәр тыуалыр шул?..*

*Шағир ҙа – тойғо һалдаты –*
*Була алмай самаса,*
*Тоҡандырмай башҡаларҙы,*
*Дөрләп үҙе янмаһа!*

*Самаһыҙ һөйәм донъяны,*
*Халҡым – самаһыҙ яҡын,*
*Ҡабатланмаҫ ғүмерем дә*
*Үҙе – самаһыҙ алтын.*

*Бирмәгеҙ самаса кәңәш,*
*Сама самаға килмәй,*
*Араларҙың сиге була,*
*Йөрәк саманы белмәй.*

*Самаса булмамын хатта*
*Йөрәк аҡтыҡ типкәндә...*
*Ҡалыр самаһыҙ күп һүҙем*
*Хатта ерҙән киткәндә!..*

1964.







## Әҙ-мәҙ мәҙәк

Төн уртаһында ҡайтып кергән иренә ҡатыны ҡысҡыра башлай:

– Быға тиклем ҡайҙа юғалып йөрөнөң? Нишләп битеңдә помада эҙҙәре?

– Помада түгел,ҡан... Ишек төбөндә мине туҡманылар...

– Шулай тип ҡотол... Бәхетең, мөртәт!



– Һеҙҙә крем бармы?

– Ниндәй аяҡ кейеменә?

– Ҡырҡ бишенсе размерға...

✦ Мәҙәк мәлдәр ☺☺☺☺☺

# Сәйәси сәкәләшеү

*Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙәрен хәҙер юбилей йылдарында ғына иҫкә төшөрәләр. Уларҙың нисә юбилей үткәрә алыуҙарын беләләрме икән?*

*Көслөләр һөсләшкәнгә өргән хөрәсән көсөк үҙ башына котора. Грузия президенты Саакашвили ҙа хәҙер инде урыны бушаған Бушка, НАТО-ға ярамһакланып, койроғон бот араһына тығып, сәңгелдәп өрөп маташа. Ә бына "барматуха"ларын эсеп ағыуланырға теләгәндәргә ул дошманы итеп күрә. Үҙе француз шарабын ғына һемерә. Йәнәһе, башкаларға "барматуха" ла бара.*

*Тулаүһеҙ килгән мал яманлыкка өйрәтә. Украина ла Рәсәй нефтен, газын нисәмә йылдар бушлай алып өйрәнгәс, түләй башлағас, Ющенко әфәндене йөҙө һарғылт кыҙылға әйләнде лә куйҙы.*

*Хәҙерге глобаль кризис – Евросоюз илдәре, АҠШ-тың этлеге. Беҙҙең Хоҙай биргән тәбиғи байлыктарыбыҙ күптән уларҙың һарыуын кайната. Нисек булһа ла нефттең, газдың хакын төшөрөп, беҙҙең стабилләштереү фондын елгә осорорға тырышалар. Алтынын биргәс, Хоҙай беҙҙең етәкселәребеҙгә акылын да бирһен ине.*

*Берҙәм, һак булырға кәрәк: халык һарыкка әүерелгән илдә бүреләр үрсей.*

**Ғәбит САДИҠОВ,**
Бөйөк Ватан һуғышы
ветераны.







✦ Көнкүрһәтмәҫ көнкүреш

# Калғанын үҙең бел...

Үҙ эшенде асыу, балаға ғүмер биргән кеүек, яуаплы шөғөл. Уны ойоштороусы И. Кучаев әфәнде мәҙәниәтле, ғилемле кеше булараҡ, исемде оҙаҡ уйлай. Бөтәһе лә иғтибар итерлек, "бына шәп исем",– тип әйтерлек булһын. Имеш, яҡындары менән оҙаҡ ҡына кәңәшләшкәндән һуң, уға "Айгөл" тигән исем ҡушалар. Күрше-тирәлә йәшәүселәр, таныш-белештәр, ҡыйһылай ҙа яғымлы исем тапҡанһығыҙ, тип һоҡлана.

– Собханалла, собханалла, тәүфиҡле, итәғәтле генә булып үҫ.

– Исемеңә есемең тап килһен.

– Кешеләрҙең рәхмәт һүҙҙәренә генә ҡойоноп йәшә.

– Хужаңдың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермә.

"Айгөл" тиҙҙән хужаһына табыш килтерә башлай. Бигерәк оҫта ҡуллы шул. Шуға эше ал да гөл бара. Уның даны күрше-тирәләге йортта йәшәүселәргә лә тарала.

Беҙҙең халыҡ күркәм йөрөргә ярата ла инде, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙар гүзәл булыу өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Шуға ла "Айгөл" бер минут та эшһеҙ ултырмай.

– Туғанҡайым, иртәгә туйға барам, быға са берәүҙә лә булмаған причёска кәрәк.

– Минең дә бик-бик матур булғым килә.

Бер бите ай, үҙе гөлсәскә кеүек "Айгөл" ялындыра буламы һуң! Берәүҙәре китә, икенселәре килә. Уларҙан аҡсалар ҡойолоп ҡала.

"Айгөл"дә сәс киҫтереп, хан ҡыҙы кеүек, күркәмләнеп сығыусыларҙың кәйефе тураһында әйтәһе лә түгел.

– "Айгөл"гә барғас, насар булалыр шул. Ал да гөл, ҡалғанын үҙең бел, – ти улар, бармағын күккә сөйөп.

Ысынлап та, "Айгөл"дәге хәлдәрҙең ҡалғанын Ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау һәм кеше именлеге өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы тикшереүселәренә белергә тура килә.

*Яҙа юл яҙаға илтә*

# Таҙартыу

– Таҙартҡандар! Таҙартҡандар!

Өфө районының Чернолес ауылында яңғыраған был хәбәргә тәүҙәрәк халыҡ әллә ни иғтибар итмәне шикелле. Бөткәндер шунда теле ауыҙына һыймаған, нимә һөйләгәнен үҙе ишетмәгән ахмаҡтар! Бәлки, берәй ярты аҡыллы йорт тирәһен ипкә килтергәндер ҙә шуға шатлығынан ни эшләргә белмәй һөрән һалалыр. Кем таҙалыҡты яратмай? Таҙа, бөхтә ерҙә үҙеңә лә күңелле!

Әммә тиҙҙән уның айышына төшөнгәс, барыһы ла ах итте, ух итте. Ысынлап та, ауылдағы яңылыҡ шаҡ ҡатырлыҡ ине шул. Типһә тимер өҙөрлөк егеттәр – Роберт Миңлеғәлиев менән Илшат Шәйхелисламов бер үк төндә И. Әсәҙуллинаның фатирын да, магазинды ла таҙартып өлгөргән! Улай ғынамы әле! Ҡырып, ялтыратып ҡуйғандар. Ғәҙәттә, аҡыллы кешеләр үҙҙәренең сауаплы эше тураһында ҡысҡырып, һөйләнеп йөрөмәй. Роберт менән Илшат та шундайҙарҙан ахырыһы. Кеше-фәлән күреп ҡалмаһын тип, улар төн еткәнен, әҙәм аяғы һил булғанын көтә.

Иң йәтеш минуттар һуға. Тирә-яҡты ҡараңғылыҡ солғап ала. Һәммә халыҡ күптән татлы йоҡола. Таҙалыҡ яратыусы икәү ауылдың Тыныслыҡ урамындағы 17-се йорттоң 1-се фатирына килә. Бында И. Әсәҙуллина йәшәй. Егеттәр тәҙрә өлгөһөн ҡырып ҡына төшөрә лә эскә үтә. Фатирҙан улар винчестер, кошелёк, биҙәнгестәр алып сыға. Инде кәйефе күтәрелгән уғрылар магазинға юллана. Йылғыр егеттәр кәштәләрҙе шәп таҙарта. Коньяк, сигарет, икмәк, носки, араҡы, һыра, шпрот, консервалар, йогурт, майонез, кетчуп, сәй, шоколад, дезодорант, бирсәткә – береһе лә күҙ уңынан ысҡынмай.

– Таҙартҡандар, таҙартҡандар!

– Нимәне?

– Әсәҙуллинаның фатирын, магазинды!

Инде был һүҙгә ауыл халҡы ғына түгел, милиционерҙар ҙа ах итте, ух итте.

– Таҙалыҡ яратыусы егеттәрҙе беҙ ҙә күрмәй ҡалмайыҡ. Кемдәр икән?

Тәртип һаҡсылары уларҙы оҙаҡ эҙләп яфаланмай.

Был эш нимә менән осланды тиһегеҙме? Илшат менән Роберт бөгөн рәшәткә артында. Ҡулдарын, намыҫтарын таҙарталар.

**В. АЙҘАРОВ.**

---

Уның эшенә төбәнә үк төшөп соҡонған белгестәр бер тауыштан:

– Да, бында эштәр хана, – тип башын сайҡай.

Эш тип сабыулап йөрөп, “Айгөл” көнкүреш хеҙмәте, ҡулланыусылары хоҡуҡтары тураһында бөтөнләй онота. Сәс киҫеү, беҙрәләтеү, маникюр хеҙмәттәрен күрһәтеү өсөн ҡулланылған парфюмерия әйберҙәренең бер ниндәй сертификаты ла, юҡ. Улар сәскә һөртеү өсөн яраҡлымы, ҡулланыу ваҡыты үтмәгәнме – уныһы бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай.

“Айгөл”дең эштәре артабан да ал да гөл булһын тигән изге ниәттән тикшереүселәр уның хужаһы И. Кучаевҡа 3 мең һум күләмендә штраф сәпәне. Файҙаһы ғына тейә күрһен!

**В. ҠАРАНОВ.**



# Үн етенсе размер

Риф МИФТАХОВ

Хикәйә

Үҙгәрештәр осоро башланғас, Сәлисә ҙур булмаған кафе-бар асты. "Киң күңел" тип исемләнгән район үҙәгендәге был бинаға йөрөүселәр һаны кәмемәне, бигерәк тә ир-ат халҡы өҙөлмәне.

Сәлисәгә типография директоры вазифаһын башҡарған ире ныҡ ярҙам итте. Туйҙар, осрашыуҙар көүек бында төрлө саралар ойоштороу, үткәреү маһирлығы менән бергә уның тамаҙа булыу һәләте лә асылды. Һуңынан, эшен ташлап, бөтөнләй ошо һөнәргә күскәс, көн-төн ҡунаҡ булыуҙан язваһы асылып, ҡапыл ғына гүр эйәһе булып ҡуйҙы. Әммә Сәлисә ҙур ҡаршылыҡтар, мәшәҡәттәр менән асҡан һөнәрен, үҙенеке китек булһа ла, башҡалар күңел асыр урынын ташламаны. Ҡыҙы менән кейәүе, баш ҡалала торһалар ҙа, ныҡ ярҙам иттеләр.

Ире үлеүгә йыл ярым самаһы ваҡыт үтеүгә, бер көндө "Киң күңел"гә оҙон ғына буйлы быға са күренмәгән урта йәштәрҙәге бер ир килеп инде. Үҙе менән алып килгән ҡырлы ике стаканға йөҙәр грамм һалыуҙы һораны ла, ҡабырға алып, яңғыҙы ғына буш өҫтәл артына барып ултырҙы. Сәлисә, башҡаларҙы хеҙмәтләндереү араһында, шым ғына уны күҙәтте. Янына кем килер икән? Ләкин берәү ҙә күренмәне. Ир, оҙаҡ ҡына уйланып ултырғас, теге стакандарҙы үҙе генә бушатып ҡуйҙы ла, бутерброд ҡапҡылап, һаубуллашып сығып китте.

Был хәл йыш ҡабатлана торҙо, Сәлисәлә лә был күренешкә ҡыҙыҡһыныу арта барҙы. Бер мәл кафела кешеләр таралып бөтөп аулағыраҡ ҡалғас, ир бөтәһен дә әүәлгесә ҡабатлағас:

– Ғәфү итегеҙ ҡыҙыҡһыныуым өсөн, – тип һүҙ башланы Сәлисә, – ниңә саҡырған кешегеҙ килмәй, Зөфәр иптәш?

– Исемемде белгәнһегеҙ, рәхмәт. – Зөфәр теүәл, тигеҙ тештәрен күрһәтеп ихлас йылмайҙы ла: – Ә бына саҡырған кешемде ниңә белмәйһегеҙҙер инде, – тине.

– Белмәйем, кем һуң ул?

– Шул һылыу ҡатынды ла белмәгәс...

– Һылыуҙар беҙҙә бик күп.

– Уға еткәне юҡтыр, моғайын.

– Әйтегеҙ, беҙгә йөрөгән ҡатын булһа, бәлки, белермен, танышырға ярҙам итермен.

– Мең рәхмәт, – Зөфәр, прилавка артында Сәлисәгә эйелеп, уның ҡолағына бышылданы, – таныштырығыҙ, зинһар өсөн, ул бында көн дә килә, бына әле лә ошонда... – Зөфәр туҡтауға, Сәлисәнең бит остарына, ҡолаҡтарына ҡыҙыллыҡ һибелде, оялышлы йылмайыуҙан тағы ла һылыуыраҡ күренде. Бер аҙҙан ҡыйыулығы ҡайтып:

– Хәҙер ир-ат, шулай ҡырлы стаканға йөҙ грамм һалып, ҡатын-ҡыҙ килгәнен көтөп ултырамы ни? Танышыуҙың яңы методы бар икән, белмәгәйнем, – тине ул үпкәләгәндәй, әммә яғымлы тауышы менән.

– Улай түгел, әлбиттә... Рөхсәт итһәгеҙ, кисен һеҙҙе оҙатырға киләм, шунда дөрөҫөн һөйләрмен. – Сәлисә йылмайҙы ла, ризалығын аңлатып, баш ҡағып ҡына ҡуйҙы.

Зөфәр һөйләүенән Сәлисә уның хаҡында шуларҙы белде: Башҡортостандың Салауат районында тыуып, урта мәктәпте бөтөрөп, армияла хеҙмәт итә, Өфөлә гидромелиорация һәм урман хужалығы факультетын тамамлағас, ер ресурстары һәм төҙөлөштәре комитетында эшкә ҡалдыралар. Бында бухгалтерияла эшләгән ҡыҙ менән таны-




**– Яңы йылға һеҙгә яңы секретарша бүләк итергә булдыҡ.**

– Решили на Новый год подарить вам новую секретаршу.

шып, өйләнешәләр. Оҙаҡламай ҡатыны, ниндәйҙер юлдарын табып, “Альфа-Банк”ка эшкә күсеп, улар фатир һатып алалар. Кәләше башта торор урын юҡлыҡҡа һылтаныП бала тапмаһа, үҙ йорттарына күскәс тә төрлө сәбәптәргә һылтана. Зөфәр эш нимәлә икәнен һиҙенә ине, әлбиттә. Ә бер көн уға кем менән буталғанын да еткерәләр. Ул ирҙе Сәриәһе менән булған осрашыуҙарҙа, мәжлестәрҙә күреп белгән була. Ғәҙәтенсә, ҡатыны ул көндә лә эшенән һаман ҡайтып етә алмай. Зөфәр иһә, ҡасанырaҡ киләсәктәрен, машина ҡайҙараҡ туҡтаясағын һиҙеп, шул тирәгә йүнәлә. Ҡара “Волга”ның килеп туҡтауы, машинанан сығып үбешә башлауҙары була, гараж артынан атылып килеп сыҡҡан Зөфәр, иң тәүҙә ҡатынын уңлыһуллы бәргеләп осора ла, “Волга”һына ултырып һыпыртырға уйлаған уның һөйәркәһен тышҡа һөйрәп сығарып, армияла өйрәнгән боксёр маһирлығы, ҙур йоҙроҡтары менән ирҙең баш-күкрәген “һыйлай” башлай. Ҡатынының ерҙе урталай ярыр әсе тауышын ишетмәһә, туҡтамаһа, моғайын, ул ирҙең һуңғы минуттары булыр ине...

Закондан бигерәк әшнәлек, аҡса көсө үҙ эшен эшләй: Зөфәрҙе биш йылға ултырталар.

– Минең урман хужалығын белгәнлекте иҫәпкә алыптыр, күрәһең, ағас йығыу эшенә ҡуштылар. Бригадир булып йөрөнөм. Рязандан Борис тигән егет менән нығ дуҫлаштыҡ, бер туғандар кеүек булдыҡ. Яҡында ғына эшләп йөрөгәндә, уны күрмәй, бер ир өҫтөнә ҙур ағасты ауҙарған. Минең ҡулда һөйләшеп ятып йән бирҙе. “Айырым стаканға һалып, йәнем тынысланһын өсөн эс, онотма, минең башҡа яҡын кешем юҡ”,– тине. Ике стаканға һалып эсеүемдең бына ошо инде сәбәбе. Тегендә лә, бында ла тыуған яҡҡа ҡайтҡас та дуҫты онотҡаным булманы.

Был һөйләшеүҙән һуң, Зөфәр оҙаҡ ҡына күренмәне. Сәлисә таныштары аша белде – больницаға һалғандар икән. Янына барғыһы килһә лә, уңайһыҙланды. Оҙаҡламай үҙе күренде. Был юлы йөҙ грамды бер стаканға ғына һалдырып алды.

– Бәй, – тине Сәлисә, йылмайып-аптырап, – теге дуҫың өсөн эсмәйһеңме ни?

– Уның өсөн эсәм, ә бына үҙемә врачтар ҡушманылар...

Сәлисә ҡыҫҡырып көлөп ебәрҙе лә:

– Ҡуй, уның өсөн дә эсмә, ғәфү итер иптәшең, мин үтенеп һорайым, – тине.

– Һин һорағас, ташлайым.

Һүҙендә торҙо Зөфәр. Бер йән булып Сәлисә йортонда йәшәй башланылар. Яңыраҡ Зөфәр көн буйы “Жигули”йы менән булды. Сәлисә лә ярҙамлашты, ире һораған инструменттарҙы, эҙләп-табып, уның ҡулына тотторҙо. Киҫкә ҡалып ҡына ҡайттылар ҙа, һыра менән генә һыйланып, йоҡларға яттылар. Зөфәр шунда уҡ әүен баҙарына китте. Тик бер аҙҙан ул бер ҡулы менән ҡатыны аяҡтарын һәрмәштерә башланы. “Арымаған икән, быға ла көсө ҡалған”, – тип Сәлисә уйларға ла өлгөрмәне, Зөфәр:

– Ун етенсе асҡыс... йә тиҙерәк... ун ете... – тип һөйләнде. Ҡатынының өй яңғыратып көлөүенән ул тертләп уянып китте. Аңлашҡас, икәүләшеп тыйыла алмай көлдөләр. Шуға ла хәҙер нәмәлер һатып алырға булһалар, Зөфәренән:

– Ун етенсе размерҙы эҙләйһеңме? – тип шаярта Сәлисә.




**– Эш хаҡын түләмәйһегеҙ икән, хет тәмәкемде тоҡандырып ебәрегеҙ...**

– Если нет зарплаты, хоть прикурить дайте.



Р. ШӘЙХЛИСЛАМОВ

## Сәнскеле сәләм сәпәп

# Ябайлаштырырғамы?

*Үлсәү берәмектәренең күплегенән башың әйләнеп йығылырлыҡ, биллаһи! Тонна, килограмм, грамм... Өфөләге 158-се башҡорт гимназияһында ашнаксы-бригадир Т. Наумова ла гелән шул үлсәгестәр менән тегеләй ҙә, былай ҙа хитлана торғас, тамам буталанып китә. Уҡыусыларға тигән икмәк кәрәгенән аҙыраҡ төшә лә ҡуя. Вермишель, ит менән булашҡанда ла зиһене тарҡала. Салатҡа кыяр, балыҡ турағанда ла грамдар киреләнә.*

*Шулай үлсәү тыңлашмай торғас, ашханала бөтәһе 497 һумлыҡ 10 банка бҡтырылған ит йыйылып китә.*

*Бәлки, үлсәү берәмектәрен ябайлаштырырға кәрәктер?*

**И. ХАҠОВ.**


Чаян
вилы
2009



### ҒИНУАР

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 5 | 12 | 19 | 26 |
| | 6 | 13 | 20 | 27 |
| | 7 | 14 | 21 | 28 |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| 4 | 11 | 18 | 25 | |

### ФЕВРАЛЬ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 2 | 9 | 16 | 23 |
| | 3 | 10 | 17 | 24 |
| | 4 | 11 | 18 | 25 |
| | 5 | 12 | 19 | 26 |
| | 6 | 13 | 20 | 27 |
| | 7 | 14 | 21 | 28 |
| 1 | 8 | 15 | 22 | |

### МАРТ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| | 7 | 14 | 21 | 28 | |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 | |

### АПРЕЛЬ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 6 | 13 | 20 | 27 |
| | 7 | 14 | 21 | 28 |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| 3 | 10 | 17 | 24 | |
| 4 | 11 | 18 | 25 | |
| 5 | 12 | 19 | 26 | |

### МАЙ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 4 | 11 | 18 | 25 |
| | 5 | 12 | 19 | 26 |
| | 6 | 13 | 20 | 27 |
| | 7 | 14 | 21 | 28 |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |

### ИЮНЬ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| 3 | 10 | 17 | 24 | |
| 4 | 11 | 18 | 25 | |
| 5 | 12 | 19 | 26 | |
| 6 | 13 | 20 | 27 | |
| 7 | 14 | 21 | 28 | |

### ИЮЛЬ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 6 | 13 | 20 | 27 |
| | 7 | 14 | 21 | 28 |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| 4 | 11 | 18 | 25 | |
| 5 | 12 | 19 | 26 | |

### АВГУСТ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| | 7 | 14 | 21 | 28 | |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 | |
| 2 | 9 | 16 | 23 | 30 | |

### СЕНТЯБРЬ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 7 | 14 | 21 | 28 |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| 3 | 10 | 17 | 24 | |
| 4 | 11 | 18 | 25 | |
| 5 | 12 | 19 | 26 | |
| 6 | 13 | 20 | 27 | |

### ОКТЯБРЬ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 5 | 12 | 19 | 26 |
| | 6 | 13 | 20 | 27 |
| | 7 | 14 | 21 | 28 |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| 4 | 11 | 18 | 25 | |

### НОЯБРЬ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| | 7 | 14 | 21 | 28 | |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 | |

### ДЕКАБРЬ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 7 | 14 | 21 | 28 |
| 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| 4 | 11 | 18 | 25 | |
| 5 | 12 | 19 | 26 | |
| 6 | 13 | 20 | 27 | |

# Йылмайып-көлөп йәшәйек, дуҫтар!

**Журналды йылдың һәр айынан башлап алдырырға мөмкин. Индексы: 73456**




## Ғәззәли ағай мәҙәктәре

# Хужа



Совхоз тарҡалып бөткәс, уның урынына яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт ойоштор-ҙолар. Яңы хужалыҡ рәйесе, уның дуҫ-иштәре урынлы булды: бригадир, бухгалтер, келәт мөдире, ферма мөди-ре. Ҡыҫҡаһы, барыһына ла "портфель" табылды. Офис-тары ғына юҡ әлегә. Мәр-хүмә Фәйшә әбейҙең өйө лә ярап тора ваҡытлыса.

Һәр көн иртә менән унда ирҙәр йыйыла. Разнарядка бер-ике сәғәткә һуҙыла, өс-дүрт папирос тартыла. Ауыл, район, өлкә хәбәрҙәрен, Мәскәү сәйәсәтен һөйләп бөткәнсе бара иртәнге кә-ңәшмә.

Ике сәғәттән контора ал-дында бер кем дә ҡалмай – халыҡ иртәнге сәйгә өйҙәре-нә тарала. Ауыл тынып ҡа-ла. Ошондай мәлдә урам са-ңын туҙҙырып, еңел машина килеп етә. Ҡапҡа төбөндә эскәмйәлә ултырған Ғәззәли ағай эргәһендә туҡтай ул. Уның эсенән:

– Контора ҡайҙа? – тип һо-рай бераү.

– Әнә, – тип күрһәтә Ғәззә-ли ағай, Фәйшә әбейҙең бер яҡҡа ҡыйшая төшкән өйөнә ишаралап.

– Ә хужа бындамы?

Ғәззәли ағай ауылдың теге башынан хужаны саҡырып килтерә. Хужаға ҡаты шел-тәләр биргәндән һуң ҡунаҡ:

– Ниңә «контора» тип яҙып ҡуйманығыҙ? – ти.

– Була, була, иртәгә үк бу-ла, – ти хужа ҡунаҡҡа.

Уның "иртәгә"һе аҙнаға һу-ҙыла, ләкин контораның бер ниндәй яҙыуы ла булмай. Башлыҡтар килһә, тағы Ғәз-зәли ағайҙы борсойҙар. Ағай хужаның әсәһенә бара ла, улының рамлы фотоһүрәтен һорап ала. Баҫҡыс алып, рамды ишек башына, юға-рыға элеп ҡуя.

Иртә менән разнарядкаға килгән ауылдаштары порт-ретты күреп, ғәжәпкә ҡала.

– Бына күрҙегеҙме, хужа булғас, хужа! – тиҙәр улар бер тауыштан.

**Йәнфиҙә ВАҺАПОВА.**
Силәбе өлкәһе,
Ҡоншаҡ районы.

"Барыбер йүнле һүҙ ишетеп булмаҫ",– тине лә, Хәтмулла ҡарт телевизорын һүндереп ҡуйҙы. Быға тиклем "йәшник"тән самолеттар шартлау, караптар батыу фажиғәләрен тулҡынланып һөйләһәләр, хәҙер донъя телендәге иң хәтәр һүҙ – кризис. Кибеттәрҙә ашамлыҡтарҙың күп төрө юҡҡа сыҡҡан, тигән хәбәр йөрөй халыҡ араһында. Хәтмуллаға нимә – барыбер. Дүрт мең дә биш йөҙ һум пенсияһына ашау-эсеүҙе төрләләндереп маташмай ул. Аҫҡа үлмәһә, шуныһы ла еткән. Шулай итеп, Яңы йылдан ҡулына килеп ингән дүрт меңгә йырлап йәшәйәсәк ул. Нимә тиһәң дә, өҙөпһүҙып үлемтегенә йыйған уң мең аҡсаһы банкыла ята. Тик шуныһы: ул аҡсаларҙы ла инфляция менән кризис "ашарға" мужыт! Барып алырға кәрәк!

Икенсе көндә ул сбербанкыға юл тотто. Хәйерлегә булһын, ҡаршыһына "тегеләйерәк" күршеһе Шәрәй осраны.

– Хәтмулла ағай, – тине ул, ауыҙын йырып, – аҙбар артында биш тин аҡса таптым, эй, ҙу-у-р, әллә бер тәңкә инде?

Ағайыбыҙ ҡулын ғына һелтәгәйне... тағы нимә күрә: урам буйлап, "ҡырын һалған" Әкәм менән Шәкәм ҡушаматлы ир-уҙамандар ҡыйыш атлай. Ҡасан өлгөргәндәр, мур ҡырғырҙары! Был алкаштарға кризис та, чурт та нипачум!

Шәкәм күҙҙәрен таҫрайтып бер аҙ ҡарап торғандан һуң телен саҡ әйләндереп:

– Һин, Хәтмулла, тимер һатып аҡса яһаның! Не возникай! – тип бармаҡ яныны. Хәтмулла тимерлектә эшләп пенсияға сыҡҡайны, шуға төрттөрә ул.

– Алдығыҙҙа ал да гөл, артығыҙҙа – кесерткән! Ана бара юлығыҙ!

Ҡыйыҡ-мыйыҡ атлап китеп барҙы тегеләр. Юл араһында иҫәнә төшөп, шырпы алырға кибеткә һуғылыуы булды, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, гелән туҙға яҙмағанды лаҡылдаған пырҙавис Әминә, ауыҙын йырып:

– Ҡайҙа киттең, Хәтмулла

**Фина ЛАТИПОВА**

# Һыуға һалған аҡса

**Хикәйә**

ағай, фитилең ҡороғоро! – тип әйтеп һалды.

– Шул йүнһеҙ теленде киҫеп ырғыт, эт тә ашамаҫ, шунда һелкенеп ятыр! – тип төкөрөндө Хәтмулла.

– Йә, ярар, шаярыуҙы аңламайһыңмы ни? Әйҙә, үҙем тураһында көләмәс һөйләйем әтеү. Бер пырҙавистың өҫтөнә сыҡҡан, ти, төрмәгә япҡандар. Ултырып сыҡҡан. Ҡайҙа барырға? Үҙ шөғөлө буйынса эшләтмәйҙәр. Киткән радиоға. Өйрәткәндәр. Диктор фурмыһында һөйләргә ултырған да: “Өфө һөйләй, Өфө ваҡыты ун һигеҙ һум, егерме тин”, – тип әйтеп тә ебәргән, ха-ха-ха!

Ҡатын шырҡылдап тонсоға яҙҙы. Ҡарт телен шартлатып, башын сайҡаны ла үҙ юлына китте... Һаҡлыҡ кассаһынан ул бөтә аҡсаһын алып сыҡты. Сүтеки, уң мең! Ыштан бөрмәһе эргәһенә кеҫә теккәйне, кеше күрмәгәндә шунда һалып булафка менән ҡаптырып ҡуйҙы. Иҫән-аман өйөнә ҡайтып сәй эсергә ултырғайны, күршеһе Ғәптерәй килеп инде.

– Сбербанкынан сыҡҡаныңды күрҙем, кем, Хәтмулла ағай, аҡсаң күбәйҙе бит? Баҫыуҙа ужым ашап күбенгән һыйырымды ерләгәндән һуң һөт ағы күргәнебеҙ юҡ, әйкәйем, үтескә бер аҙ аҡса биреп тор әле, – тип иламһырай башлағайны, Хәтмулла ҡырт киҫте:

– Былай ғына инеп сыҡтым!

– Сүтеки, аҡсаң булһа, быяла банкаға тыҡ та һыуға һал! – тип шаяртты Ғәптерәй сығып киткәндә, – яңылышмаҫһың, күрше!

Хәтмулла уйға ҡалды: ысынлап та, быяла банкаға һалып, мунса артындағы инешкә төшөрөп, ағып китмәһен өсөн бау менән бәйләп ҡуйһаң? Ҡар яуып китһә эҙе лә ҡалмай, яҙын, кризис бөтһә, бараһың да алаһың. Был шаҡ ҡатырғыс уй уның башынан сыҡманы. Шулай булмай, көнө-төнө кризис хаҡында һөйләһәләр, башың ҡатып миңрәүләнеп китеүең бар. Аң-аҡыл барҙа эшләп ҡалырға кәрәк, – Хәтмулла аҡсаһын һыуға һалды...

Төш ауышҡас, ихаталағы эштәрен бөтәреп урамға сыҡһа, Ғәптерәй һыйырын ҡыуып ҡайтып килә.

– Өләсәйемә һыу алырға тип инеш буйына төшкәйнем, – тине ул ауыҙын ҡолағына еткереп, – күрәм, банка йөҙөп килә, эсендә – аҡса! Ҡуктәгеләргә рәхмәттәр уҡып, үрге ос Ҡыяр Ғәлиҙән һөтлө һыйыр һатып алдым!

– Ҡаҙалып ҡына китһен был кризис!..

Хәтмулла йоҡо аралаш ҡаты аҡырып тыпырсынды, яңылыш аяғы ғырлап ятҡан ҡатыны Гөлмәрфуғаға тейеп, тегеһе карауаттан йығылып төштө һәм баҡа кеүек иҙәнгә һуҙылды.

Мәшәҡәтле яңы көн тыуып килә ине – әтәстәр ҡысҡырҙы...







**– Бик тайғаҡ, тип зарланалар...**
**– Шылғаҡ график буйынса эшләйбеҙ бит.**
– Жалуются, что очень скользко...
– Так ведь работаем по скользящему графику.

Ризван ХАЖИЕВ

# Ғәрәп мулланы

(Булған хәл)

Йәйен дә, ҡыштарын да бер үк йырҙы йырлап, бер үк көйҙө көйләп һәм таштан-ташҡа һикереп Йүрүҙән йылғаһына юрғалаған Ҡорғаҙаҡ шишмәһенән бер ҡасан да кеше өҙөлгәне юҡ. Оло Ыҡтамаҡ – Өфө трассаһы ла ошонан үткәс, машиналар менән дә, йәйәүлә тә үткән-һүткән һәр кем уның эргәһенә туҡтап, шифалы минерал һыуын эсеп, ял итеп, юл ыңғайы фләк, бидон, хатта буш шешәләргә тултырып алып китәләр.

Бөгөн дә Мәсәғүт яғынан ике "Жигули" күренде һәм шишмә ярына килеп туҡтаны. Алғы машинанан ҡалын кәүҙәле, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, кәс-кеүәте көңгөрт йөҙөнә сыҡҡан, тап-таҡыр итеп ҡырылған башына түбәтәй, өҫтөнә елән кейгән, ғәрәп кешеһенә тартым ҡырҡ йәштәр тирәһендәге ир-үҙаманы, бер ҡулына фил һөйәгенән яһалған суҡлы тиҫбе тотоп, икенсеһенә оҙон таҫтамал һалып, ҡояштан ныҡ ҡыҙған ҡомло ергә ялан аяҡ баҫты ла ашыҡмай ғына шишмәгә ыңғайланы. Муйылдай ҡара күҙҙәрендә, ғорур башын сөйөп атлап барыуында ниндәйҙер һауалыҡ, тәкәбберлек, хатта серлелек тә һиҙелә ине. Тәүҙә ул, яҫы ташҡа ултырып, һалҡын һыуҙа битен, аяҡ-ҡулдарын йыуҙы, һәйбәтләп һөртөндө, бер аҙ тиҫбеһен тартып уйланып ултырҙы ла, аяҡтарына баҫып, быуа таштары араһынан селтерәп аҡҡан шишмәгә ҡарап доға ҡылды, таҫтамалын ташҡа йәйеп ниндәйҙер ят телдә намаҙ уҡырға кереште. Был мөғжизәне хайран ҡалып ҡарап торған юлсылар тиҙҙән уны һырып алды. Ниндәйҙер ахмаҡ намаҙ уҡый, йәнәһе. Кемдер хихылдап көлдө, икенсеһе төртмәле һүҙ ысҡындырҙы. Ләкин күпселек уларҙың ауыҙҙарын тиҙ ябып, яндарынан ҡыуып ебәрҙе.

Таш өҫтөндә тәүҙә көмөш аҡсалар тәгәрәне, һуңынан ҡағыҙ аҡсалар өйөлә башланы.

– Изге мулла был, – тип үҙ-ара һөйләнде халыҡ. – Ана, нисек оҫта итеп Ҡөрьәндән сүрәләр уҡый. Урта Азиянан, хатта Ғәрәбстандың үҙенән булырға тейеш.

Аҡрын ғына шикләнеберәк әйтелгән һүҙ бөтә халыҡты ялмап алды. Түңәрәк ҙурайғандан-ҙурая, киңәйгәндән-киңәйә барҙы. Таш өҫтөндәге хәйер аҡсаларынан да өйөм барлыҡҡа килде. Ел осормаһын тип, кемдер уны таш менән баҫтыра барҙы.

– Рәмил, нишләүең был? – Әлегенә машина тәҙрәһенән ҡарап көлөп ултырған ҡатыны Зөлфирә, иренең туфлиҙарын алып, алғараҡ үтте лә ҡолағына шыбырланы: – Ҡуйсы, кеше көлдөрөп ултырма, әйҙә, киттек.

– Тик тор, оҫтабикә! – тине уға Рәмил пушту телендә, асыуланып. – Күрмәйһеңме, аҡса һалалар бит. Эсеңде тишмәҫ...

Рәмил үткән быуаттың һикһәненсе йылдарында взвод командиры сифатында Афған һуғышында ҡатнашҡайны. Батырлығы өсөн ордены ла бар. Ана шул Афғанстанда өйрәнеп алды ул пушту телен һәм бөгөнгә намаҙын да шул телдә алып барҙы, ә уратып алған кешеләр уны "ғәрәп мулланы" тип уйлап, хәйерҙе лә муллараҡ төшөрҙө, бер ни аңламаһалар ҙа ихлас тыңланы, биттәрен һыйпағанда улар ҙа биттәрен һыйпаны.

Шишмә ярына тағы ла бер "КамАЗ" килеп туҡтаны.

– И-и-и! – тип шатлығы эсенә һыймай килеп төштө унан оло ғына йәштәрҙәге ҡатын һәм, өҫ-башын йүнәтеп, "мулла" янына ашыҡты. – Ысын ғәрәп муллаһын күрер көндәрем дә бар икән, рәхмәт төшкөрө! Иҙрис улым, – тине ул, артына боролоп, – ҡана, биш йөҙ һум аҡсанды йәлләмә, хәйергә бирәйек. Оҙон юлыбыҙҙа ҡош-ҡортҡа осрамай, ватылмай, имен-аман ҡайтып етеүебеҙҙе теләп доға ҡылһын.

Рәмил был һүҙҙәрҙе ишетеү менән аяғөҫтө үк баҫып, ҡулдарын ҡолаҡтарына ҡуйып, донъяның дүрт тарафтарына ла борола-борола аят уҡырға, оҙон юлды ҡыҫҡартып тиҙерәк ҡайтып етеүҙәрен теләне.

Хәйер аҡсалары ҡар һымаҡ яуҙы ла яуҙы.

Хәҙер уның янына икенсе машинала килгән ауылдашы Ғәли ашыҡты.

– Рәмил, – тине ул, иптәшенә эйелеп. – Әйҙә, һыҙҙыҡ бынан. Юғиһә, белеп ҡалһалар, икебеҙгә лә эләгәсәк.

А. ВАСИЛОВ




**– Бушлай эшләгән замандар үтте инде, Емелюшка!**

– Времена когда я работала бесплатно, прошли, Емелюшка!

Рәмил, намаҙ уҡыған кеше булып, тирә-яғына күҙ йүгертеп сыҡты. Халыҡ, ысынлап та байтаҡ йыйылып киткәйне шул. Кемдер “ғәрәп муллаһы”н фотоға төшөрә башланы, кемдер “видео”һына тотондо... Араларынан Ҡөрьән сүрәләрен белгән берәйһе табылһа, ул фашланасаҡ, эш ҙурға китәсәк. Имен саҡта тайырға кәрәк. Ул ашыҡмай ғына тубыҡланып тағы бер сәждә ҡылды ла, туфлиҙарын кейеп, йыйылған хәйер аҡсаларын елән кеçәләренә тултырҙы. Ҡулдарын күкрәгенә ҡуйып, халыҡҡа баш эйә-эйә машинаһына инеп ултырҙы. Үҙе лә, юлдаштары ла, “пырх” итеп көлөп ебәрмәç өсөн, ауыҙҙарын устары менән ҡапланы. Тик Малаяҙ ауылын уҙғас ҡына уларҙың шырҡылдап көлөүенән машина күтәрелеп китә яҙҙы. Рәмил юлдан ситкә боролдо һәм йыйылған аҡсаларын һанарға кереште.

– Оһо-һо, – тине ул күҙҙәрен хәйләкәр ялтыратып. – Бында минең ике айлыҡ эш хаҡы ята бит. Аҡсаларын ҡайҙа тығырға белмәгән дүрәктәр аҙмы ни беҙҙә? – тип йылмайҙы ла йәнә рулгә тотондо.

Әлепте таяҡ тип белмәгән “мулла” Рәмил Өфө арьяғы райондарының береһендә ябай агроном булып эшләй ине.

## Беҙҙең ауыл мәҙәктәре

# Илдар-бака

***Беҙҙең класта утыҙ уҡыусы була торғайны. Күп кенә балалар яҡын-тирәләге ауылдан йөрөп уҡынылар. Мәктәптән алыҫ ауылдағыларға дөйөм ятаҡ бар ине.***

***Әҙәбиәттән беҙҙе бик баçалҡы һәм әҙәпле ағай уҡытты. Дәрес аңлатканда тыңламай ултырған малай булһа, тәүҙә уның эргәһенә килеп: “Етте һиңә”, – тип шелтә генә яһай. Шаярыуын дауам итһә, уға ҡулындағы аҡбурын осора. Бынан һуң да тыңламаһа, класс алдына саҡырып сығара ла арт яғына –”шарт берҙе”. Ошо ысулдан һуң егетебеҙ майланған һымаҡ була. Ә ҡыҙҙарға килгәндә шелтә менән генә сикләнә торғайны.***

***Шулай көндәрҙең береһендә математика дәресе булды. Уҡытыусыбыҙ Минзифа Рәхимовна дәрес бирә. Ул беҙҙең класс етәксеһе лә. Бер ваҡыт беҙ ҡушыу менән алыуҙы өйрәнә башланыҡ. Уҡытыусы, башта меңлектәрҙән берәмектәрҙе алырға өйрәтеп, класс таҡтаһына ниндәйҙер һандар яҙып ҡуйҙы ла иң артҡы партала дәресте тыңламай шаярып ултырған Илдарҙы таҡтаға саҡырып сығарҙы.***

***Малай бер нәмә лә һөйләй ҙә, яҙа ла алмағас, уҡытыусы апайыбыҙ:***

***– Иғтибар менән тыңлағыҙ, – тип дәресте ҡабатлағас, малай, аңлағанын белгертеп, баш ҡаҡты.***

***– Улай булғас, әйҙә беҙгә лә һөйләп ебәр әле, – тип уҡытыусы таҡтаға меңлектәрҙе яҙып, шуларҙан берәмектәрҙе алырға ҡушты.***

***Тик Илдар, нисек таҡта янына сығып баçһа, шул килеш ҡыҙарынып-бүртенеп тора бирҙе. Уҡытыусыбыҙ түҙмәне:***

***– Бына былары нимәләр? – тип һораны.***

***Илдар һаман шул ҡиәфәттә бер һүҙһеҙ тора бирҙе.***

***Асыуы килгән уҡытыусы:***

***– Әллә былар бакалармы?– тип указкаһы менән таҡталағы һандарға төрттө.***

***– Эйе, был бакалар! – тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе малай.***

***Уның көтөлмәгән яуабынан бөтә класс гөж килеп көлә башланы. Шунан һуң ни Илдарыбыҙ “бака”ға әйләнде лә ҡуйҙы.***

**Л. ҠАНСУРИНА.**
Йылайыр районы.












**– Ярата... Яратмай...**
– Любит... Не любит...

Назим ҒАЙСИН

# Мохай ғөсөлө

**(Булған хәл)**

Мөхтәр 42 йыл Тажикстанда мөғәллим булып эшләп, СССР тарҡалғас, тыуып-үҫкән Сораны буйына – Әхмәр ауылына ҡайтты. Йәйге иртәлә сәй эсеп алғас, ҡатынының йорт мәшәҡәттәренән бер аҙ бушағанын көтөп торҙо ла уға былай тип өндәште:

– Зөлфиәкәйем, бөгөн көн матур, аяҙ, етмәһә йәкшәмбе, бәләкәй ейәнсәребеҙ ҙә ҡунаҡ булып килгән, әҙ-мәҙ саф һауа һулап ҡайтмайбыҙмы?

Ҡатыны риза булды. Зөлфиәһен, ейәнсәрен, бәләкәс көсөгөн дә өр-яңы “Жигули”йына ултыртып, яратҡан йылғаһы буйына ҡарап елдерҙе.

Һәр ваҡыттағыса, Соран буйы һыу ҡойонған бала-саға, ҡыҙ-ҡырҡын тауышынан сыр-сыу килеп, яңғырап тора. Шуныһы ғәжәп: һыу инеүселәр араһында ир-егет һирәк күренә. Күрәһең, улар аулағыраҡ урынды хуп күрәләр. Машинаһын ағас күләгәһенә ҡуйып, ҡатынына:

– Һеҙ ошо тирәлә ял итегеҙ, ә мин балыҡ тотоу өсөн ҡулай урынды ҡараштырып киләйем, – тип йылғаның түбән яғына ҡарап юл тотто.

Бер аҙ барғас, Мөхтәр йылға бөгөлөндә бер ирҙәң: “Биш, алты, ете!” – тип һанай-һанай туҡтауһыҙ сумып сығыуын күреп, аптырап ҡарап торҙо. “Күрәһең, берәй спорт төрөләр инде”, – тип уйлап ҡуйҙы. Ҡарай торғас, ул уны таныны: былтыр көҙ өйләнгән ошо ауыл егете Мохай икән. Ул, ун ике һанын әйтеп, ғәүрәттәрен ҡулы менән ҡаплап ярға сыҡты.

– Һаумы, Мөхтәр ағай, хәл-әхүәлдәрең яҡшымы? Мин иһә ғөсөл ҡойоноп йөрөйөм, – тине ул, ғәйепле кеше һымағыраҡ.

– Мин төшөнмәнем ғөсөлөңдө, энем? Ғөсөл шулай буламы?

– Бына был ҡомға ҡаҙап ҡуйған таяҡты күрәһеңме?

– Күрәм!

– Күрһәң, ошо таяҡта 12 киртеп ҡуйған билге бар, ул көндә кәләшем Зәкиә менән яҡынлыҡ ҡылғайным. Һәр яҡынлыҡты онотмаҫҡа таяҡ-фәләнгә теркәп, киртеп барам. Һәр көн ғөсөл ҡойонмайым. Барлыҡ яҡынлыҡ ҡылыу фарыздарының ғөсөлөн бер көндә сумып-сумып башҡарам да ҡуям.

Мөхтәр эсе ҡатып көлә ләː

– Мохай энем, һин дин буйынса яңылыҡ уйлап сығарғанһың, бындай ғөсөлдө беренсе мәртәбә ишетәм. Ошо һинең ғөсөлөңә оҡшаған, тәһәрәтләнгәндәге ҡыҙыҡ мажараларҙы үҙ күҙем менән йәш саҡта күргәйнем. Беҙ, Душанбе дәүләт институтының һуңғы курсында уҡып йөрөгән студенттар, урыҫ әбейендә фатирҙа торҙоҡ. Бер фатирҙа өс егет: мин, ике үзбәк егете. Хамраев фамилиялы егет намаҙ уҡыу тәртибен һәйбәт белә. Бер ваҡыт таң тишегенән Поля апайҙың һәр көн сәй ҡайнатып эсә торған ялтыр эмалле яңы сәйнүген әбрәкәйгә алып барып истинжә ҡылған, йәғни, асыҡлабыраҡ әйткәндә, ғәүрәттәрен йыуған.

Поля апай уның ҡылған эштәрен белгәс, һуҡырана-

## ✦ Әҙ-мәҙ мәҙәк

☺☹☺

**Берәү эштә башын папкаларға йәшереп йоҡлап китә.**

**– Йоҡлап буламы? – тип һорай унан коллегаларының береһе.**

**– Ниндәй йоҡо булһын ти? Өйҙәге йоҡоға етмәй инде ул, – тип яуаплай теге, күҙен асмай ғына.**

☺☹☺

**Ҡатыны һигеҙ йыл бергә йәшәгән иренә фотоһүрәт тоттора ла:**

**– Бөгөн киске алтыла ошо баланы мәктәптән барып алырға онотма, ул беҙҙең улыбыҙ, – ти.**

һыҡырана, тәүҙә сәйнүген ҙур ҡаҙанға һалып ҡайнатты ла аҙаҡ ишек алдында ятҡан ваҡ ҡом менән, яҡшылап ышҡып таҙартты. Водопроводтан килгән һалҡын таҙа һыу менән сайҡаны. Башҡаса ул сәйнүген кухняһында ҡалдырманы, үҙенең йоҡо бүлмәһенә ҡуя торған булды.

Хамраев аптыраманы: күршелә генә йәшәгән, минең ҡайынбикә ихатаһында ултырған ҙур шешәне эшкә екте. Ә ҡайынбикәм, йығылып ятып көлә:

– Эй, Мөхтәр кейәү! Минең ул шешәм таҙа түгел бит. Уның менән примуска ла, керогазға ла кәрәсин ҡоям. Кәрәсин еҫен танауы һиҙмәйме икән ни Хамраевтың?

Бына шулай, Мохай энем, донъяла төрлө ҡыҙыҡ ваҡиғалар ҙа күп, мажаралы әңгәмәләр ҙә бихисап.



Рәсих ХАННАНОВ

# Шаян иҫтәлектәр

## Аферистар

Кәтүк (Әхәт Уразмәтов) менән Бағанай (Фәфүр Латипов) бер районға гастролгә киләләр. Ул саҡ ауылдарҙа радио бик һирәк өйҙәрҙә генә була. Халыҡ клубҡа йөрөп күңел асырға күнеккән, шунлыҡтан артистар килһә, был көн байрамға әйләнә. Кәтүк менән Бағанайҙың килеүен дә шатланып ҡаршы алалар. Ә колхоз рәйесе – бигүк белемле лә булмаған иптәш – ул саҡта район үҙәгенә киткән икән. Ауылда баш һәм түш булып һаналһа ла, рәйестең ҡайтҡанын көтмәҫкә булалар.

Концерт башлана. Артистар сәхнәгә аяҡ баҫыу менән кешеләрҙе көлдөрөргә тотоналар. Шул саҡ клубҡа рәйес килеп инә. Ҡыҙыуынан үҙенең биттәре ҡыҙыл сөгөлдөр кеүек булған.

– Һеҙ кемдәр? Моғайын, аферистарҙыр! Документтарығыҙҙы күрһәтегеҙ! – ти был.

– Беҙ артистар, – ти Кәтүк менән Бағанай, “бәйләнсек” бәндәнән ҡотолорға теләп.

– Юҡ, һеҙ үҙегеҙ әйткән кешеләр түгел. Улар әле район үҙәгендә сығыш яһайҙар, радио аша яңғыраталар ине уларҙың әкәмәттәрен, үҙ ҡолаҡтарым менән ишеттем. Күрһәтегеҙ документтарығыҙҙы, юғиһә милиция саҡырам!

Нимә эшләйһең, Бағанай сәхнә артына документтарҙы алырға сығып китә, Кәтүк рәйес менән шаярып һөйләшеүен дауам итә. Халыҡ рәхәтләнеп көлә.

– Бына һиңә мә! – ти, аптырап ҡалған рәйес артистарҙың паспорттарын ҡарағас. – Тимәк, тегендә радионан һеҙҙең исемдән һөйләүселәр аферистар булып сыға инде. Тейешле органдарға хәбәр итергә кәрәк.

– Бер ҡайҙа ла хәбәр итергә кәрәкмәй, беҙҙең сығышты радиола яҙҙырып алғайнылар, шуны яңғыратҡандарҙыр.

– Мәҙәктәр шулай тыуа инде ул, – тип өҫтәй Бағанай һүҙҙәренән һуң Кәтүк.

Зал тәгәрәп көлә, бөтә был мажараны тамашасылар сираттағы уйын тип ҡабул итә.

## Һин кем малайы?

Байтаҡ йылдар үткәс, Кәтүктәр яңынан ошо ауылға килә. Билдәле, был ваҡытта тормош үҙгәргән, ауыл матурланған, өйҙәрҙә телевизор күрһәтә. Кешеләр тураһында һөйләп торһаң ла түгел. Клубтары ла өр-яңы. Ҡыҫҡаһы, артистарҙы шаулап торған мәҙәниәтле тормош ҡаршы ала.

Кисен ҙур зал халыҡ менән шығырым тула. Артистар шатланып эшкә керешә. Йырсылар йырлай, бейеүселәр бейей, юмористар тырышып-тырышып үҙҙәренең һөнәрен күрһәтә. Бигерәк тә Әхәтте яраталар, уның һәр һүҙе, һәр ҡыланышы ихлас көлөү тыуҙыра. Сөнки ул бөтә һәләтен, күңелен биреп уйнай.

Концерт тамамланғас, артистарҙы оҙаҡ ваҡыт сәхнәнән ебәрмәй торалар. Быңдай уңыш, әлбиттә, һәр коллективҡа һәр ҡасан эләкмәй. Ләкин иң ҡыҙығы алда була.

Ҡайтырға сыҡҡас, клуб алдында артистарҙы тамашасылар уратып алалар, һәйбәт сығыштары өсөн рәхмәт әйтәләр, һорауҙар бирәләр. Шунда оло ғына йәштәге бер ир Әхәт Уразмәтов янына килә лә:

– Һин кем? Кәтүктең үҙеме, әллә малайымы? – тип һорай.

– Атайҙың үлгәненә әллә ҡасан бит инде, мин уның малайы ғына, – тип яуап бирә Әхәт, көлөп.

Ир уға иғтибар менән ҡарап тора ла:

– Шулайҙыр тип уйлағайным да, атайың бик шәп уйнай ине, һин уға етеңкерәмәйһең әле! – тип китеп бара.

# ЕҢГӘ ҺӨТӨ

**Юмореска**

Ихлас та инде ошо еңгәм. Телефондан һөйләшкән һайын ҡунаҡҡа саҡыра, килмәгәнгә үпкәләп бер була.

– Килегеҙ беҙҙең ауылға, рәхәтләнеп ял итеп, туйғансы һөт эсеп китерһегеҙ, – ти.

Шылтыратҡан һайын берәй йомошо була, әлбиттә, йә малайын институттан ҡыумаһындар өсөн уҡытыусылары менән һөйләшергә кәрәк, йә уға ит һатып алыусылар эҙләшергә тура килә. Донъя мәшәҡәте бөтәме ни. Ярҙам итмәй ҙә булмай, үҙ еңгәм бит, өс туған ағай менән йәшәй.

Кисә еңгә тағы шылтыратты:

– Ҡәйнеш, был йылда ғаилең менән әбизәтелне кил, – тип мәсьәләне ҡаты ҡуйҙы ул. – Килмәһәгеҙ, үпкәләйем. Рәхәтләнеп һөт эсерһегеҙ, теләгәнсә алып китерһегеҙ. Ана, ағайың шалҡан кеүек таҙа, ауыртҡан ере юҡ, биҙрәләп һөт эскәнгә шулай ул.

Ғәжәп бит. Ауылда татлы ризыҡ бөткәнме ни? Юҡ шул, еңгә бал да, ҡаймаҡ та тимәй, мунса, матур тәбиғәт менән дә ҡыҙыҡтырмай, бары һөтөн маҡтай. Аңламаҫһың, әллә бесәй кеүек һөткә үлеп бара, үҙе әйтмешләй, мине лә биҙрәләп һөт кенә һемерә тип уйлай микән?

Ҡунаҡ булырға кем яратмай. Өйгә ҡайтып әйткәс, ҡатын да, балалар ҙа ихлас ҡыуанды. “Исмаһам, ауылда туғандарың да юҡ” – тип йыш һөйләнгән ҡатындың шатлығы айырыуса ҙур ине.

– Ауыл кешеһе үҙе йомарт була торған, – тип, супермаркеттарҙы бер итеп йөрөп, машинаның багажнигын күстәнәстәр менән лыҡа тултырҙы был.

Машина өсөн 500 саҡрым нәмә генә ул. Алты сәғәт тигәндә районға килеп тә еттек. Телдәр еңгәм кеҫә телефонынан, ауылға туранан 50 саҡрым ғына ҡала, юлы насарыраҡ, әммә үтергә була, тигәйне. Юлы, ысынлап та, шәп түгел икән. Текә тауҙарҙы бер менәбеҙ, бер төшәбеҙ. Йөк машиналары урман юлын йырғыслап бөткән. Бер ташҡа, бер төпһәгә барып мөнгән машинабыҙ двигателе тракторҙан яманыраҡ үкерә башланы. Шулай ҙа кәйеф күтәренке, алда һый-хөрмәт, эсе мунса, йылы һөт көтә бит.

Ауылға төн уртаһында саҡ барып еттек. Еңгәләрҙең өйөн табып, ишеген астырып кергәнсе таң һарыһы беленә башлағайны. Аяҡтарҙа көскә баҫып торабыҙ, хатта табында ултырырлыҡ хәл ҡалмағайны. Һиҙгер күңелле еңгәм быны аңланы, буғай, сәйен дә тәҡдим итеп торманы.

Иртәгәһенә ҡатын ярты көн буйы кейемдәрҙе таҙартты, мин машина менән булаштым. Бер ыңғайҙан телдәр еңгәбеҙҙе тыңлайбыҙ.

– Ошо һыйырҙан ҡасан ҡотолам инде, – тип бер мәл ҡыҙып китте ул. – Йәй буйы шулар тип бесән әҙерләйһең, ҡыш буйы ҡарайһың, ҡаланыҡыларға рәхәт, килеп һыйланып китергә генә беләләр. Һөт-ҡаймаҡ юҡмы ни, тип таптырырға тартынмайҙар.

Хужаларҙың урамда уйнап йөрөгән бәләкәй ҡыҙҙары миңә нәфрәт менән ҡарап ҡуйҙы.

– Ҡыҙым, – тип өндәште уға еңгәм. – Ағайыңдарға тигән һөттө айырып һалып ҡуй әле, һауыты шунда ғына.

Ҡыҙыҡай миңә тағы бер тапҡыр яман итеп ҡараны ла йүгереп өйҙәренә кереп китте. Еңгәм шул арала эргәгә килеп баҫҡан күрше ҡатынға, унан урамдан үтеп барған әбейгә ҡаланан килгән ҡунаҡтар, уларға күстәнәскә һөт-мәҙәр әҙерләп йөрөүе хаҡында һөйләп өлгөрҙө. Унан һөттө айырып һалған, тик уны һыуытҡысҡа ҡуйырға оноҡтан ҡыҙын тетеп әрләп сыҡты.

– Бөгөн былай ҙа һөттө әҙ тапшырҙым, аҡсаһы кәмерәк була, ә һин ишшу уны әсетеп әрәм итергә тырышаһыңмы? – тип тамам ярһыны еңгәм. Ә миңә оят булып китте: ауыл кешеһен күрәләтә талайбыҙ бит, тиҙерәк китергә кәрәк бынан.

– Ҡунаҡ итеп тә булманы, ярай, иркенләп тағы килерһегеҙ әле, – тине еңгәм ихлас йылмайып. Шунан үҙенән аша ҡарап торған малайының арҡаһынан дөпөлдәтеп һөйҙө. – Бәпесемде лә алырһығыҙ инде, каникулы бөттө бит.

Бәпесенең әйбере хәтһеҙ булып сыҡты. Ике тоҡ бәрәңге, бер тоҡ кишер, сөгөлдөр-фәләнде, өс-дүрт сумканы багажникка көскә һыйҙырҙыҡ.

– Ә бына быныһы – һеҙгә! – Хужабикә бер литрлыҡ шешәгә тултырылған һөттө тантаналы рәүештә ҡатыныма һуҙҙы. – Көн дә ун литр һөт тапшыра инем, бөгөн кәмерәк бирҙем, мәйтәм, ҡунаҡты күстәнәсһеҙ ҡайтарырға ярамай. Рәхәтләнеп эсегеҙ.

Ауылды сығып өлгөрмәнек, кеҫә телефоны шылтыраны. Еңгәм икән.

– Һөт тиҙ генә әсей ҙә ҡуя ул, ҡатыныңа әйт, ҡайтҡас та ҡайнатып ҡуйһын, баҡса емеше түгел бит, аҡса емеше. Ҡәйнеш, бәпесемде алып барып еткереп, бүлмәһенә урынлаштырып китерһең инде юл ыңғайында, бер-бер хәлгә тарып ҡуймаһын тип ҡот осоп тора. Һеҙҙең ҡала халҡы әшәке, аҙым һайын аферист та хулиган...

Телефонды ситкә бырғытам да эргәлә ятҡан һөт шешәһенә нәфрәтләнеп ҡарап ҡуям. Яндырылған бензин, ремонтланасаҡ двигатель хаҡын ғына иҫәпләһәм дә сама менән биш мең һумға төштө бит ул...

**Марат ӘМИНЕВ**.

## Унан-бынан

- **Байыған ярлынан бурыс алма.**
- **Кем талай – шул байый.**
- **Иҫерек айныҡты күрә алмай.**

**И. ХАҠОВ ишетте.**






# Дуҫтар күстәнәсе

**“CARICATURA.RU” интернет сайтынан.**












**ҠАТНАШАЛАР:**
**Ҡыйыҡбай**
**Айыҡбай**

Мар. СӘЛИМ

# Әй, әсәбеҙ, әсәбеҙ...

**(Скетч)**

*Ҡыйыкбай кыйыш тейәп алған. Танауы кып-кыҙыл, күҙ төбө күм-күк. Кеҫәһе кабарып тора.*

**Ҡыйыҡбай** *(тамағы карлыккан булһа ла, йырлап маташкан була).*

Эстек тә беҙ иҫерҙек,
Ҡайҙа беҙҙең шешәбеҙ?
Шешәне күп алған һайын,
Шиңә бара кеҫәбеҙ.
Эскеселәр шундай була:
Ямау һалған кеҫәһе.
Ямау һалған кеҫәһенән
Күренеп тора шешәһе.

*Ҡыйыкбай элекке дуҫы Айыкбайҙы осрата.*

**Ҡыйыҡбай.** О-о, кемде күрәм! Һау ғынамы, Айыҡбай ағай? *(Уны косаклап, битенән үбеп ала.)* Байрам менән!

**Айыҡбай** *(осрашыуға шат түгел).* Һине лә, Ҡыйыҡбай ҡустым. Тик бөгөн ниндәй байрам һуң?

**Ҡыйыҡбай.** Һинең менән осрашыу байрамы, Айыҡбай ағаҡайым! Ҡасандан бирле күрешкәнебеҙ юҡ?

**Айыҡбай.** Реформа башланғандан бирле.

**Ҡыйыҡбай.** Эйе шул. Баҙарға күскәс, көн бөттө беҙгә. Ә бит шәп замандар бар ине...

**Айыҡбай.** Әле лә хәрт түгел.

**Ҡыйыҡбай.** Нишләп хәрт булмаһын инде, Айыҡбай ағай. Бөтә донъяны кризис баҫып килә. Ә һин, хәрт түгел, тиһең.

**Айыҡбай.** Ниндәй кризис?

**Ҡыйыҡбай.** Бәй, радио тыңламайһыңмы ни, телевизор ҙа ҡарамайһыңмы? Долларҙың хаҡы ҡотороп арта, банкылар дөрләп яна, тип күпме тылҡыйҙар.

**Айыҡбай.** Һуң, шунан? Нимә, әллә һинең банкылағы аҡсаң яндымы?

**Ҡыйыҡбай.** Аллаға шөкөр, янманы. Сөнки банкыға һуҡыр тин дә һалманым. Мин бит, Айыҡбай ағай, аҡсамды, байҙар кеүек, банкыла һаҡламайым...

**Айыҡбай.** Ә ҡайҙа һаҡлайһың?

**Ҡыйыҡбай.** Ғөмүмән, мин уны һаҡламайым. Хеҙмәт хаҡын алыу менән туҙҙырып бөтөрәм. Шулай ышаныслыраҡ. Аҡсам яныр, тип ҡурҡаһы юҡ.

**Айыҡбай.** Ҡурҡмай ғына елгә осораһың, тимәк.

**Ҡыйыҡбай.** Елгә түгел, Айыҡбай ағай, тамағыма осорам. Эсемлеккә әйләндереп... Уф, тамағым кипте, әйҙә сылатып алайыҡ әле!

**Айыҡбай.** Юҡ, юҡ!

**Ҡыйыҡбай.** Юҡ түгел, Айыҡбай

А. АНДРЕЕВ




**– Хәтерләйһеңме, Ҡуян йылында һин дә миңә ҡул ҡуймағайның?..**
– Помнишь, в Год зайца ты мне тоже не подписал?..

ағай, бар. Миндә бынамын тигәне бар. Хәмерҙән дә шәберәк. Осрашыу хөрмәтенә әйҙә көгеп ҡуяйыҡ.

**Айыҡбай.** Юҡ, юҡ!

**Ҡыйыҡбай.** Һин нимә, Айыҡбай ағай, әллә?..

**Айыҡбай.** Эйе, мин эсеүҙе ташланым.

**Ҡыйыҡбай** *(көлөп).* Әҙәм ышанмаҫтай хәбәрҙе ысын булһа ла һөйләмә!

**Айыҡбай.** Ышанһаң – ышан, ышанмаһаң – юҡ, мин хәҙер кефир ғына эсәм.

**Ҡыйыҡбай.** Кефир? Ха-ха-ха! *(Аунап-тәгәрәп көлә лә таҡмаҡларға тотона.)*

Эй, эсәбеҙ, эсәбеҙ,
Бушай бара шешәбеҙ.
Араҡылар бөтөп китһә,
Хушбый алып эсәбеҙ!

Хәтереңдәме, бер саҡ икеү кистән одеколон эстек тә иртән теш пастаһы менән баш төҙәттек...

**Айыҡбай** *(йөҙөн һытып).* Фу-у... Исҡә төшөрмә! Күңелем болғана.

**Ҡыйыҡбай.** Хәҙер күтәрелер күңелең. *(Кеҫәһенән ҙур һауыт сығара.)* Бик файҙалы дарыу!

**Айыҡбай.** Булмаҫ. Эсеүҙең зыяндан башҡа файҙаһы юҡ. Ташла һин уны.

**Ҡыйыҡбай.** Ҡара, ҡара, баҙарға күскәс тә, фәрештәгә әйләнгән! Һин теләһәң ни эшлә, әммә мин эсәм. Рәхәтләнеп эсәм әле. Һине күреү шатлығынан. Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа!.. *(һауытты күтәреп эсә.)*

**Айыҡбай.** Туҡта! Нимә һемерәһең?

**Ҡыйыҡбай.** Үҙебеҙҙең марка. Первач!.. *(Эсеп бөткәс, “гәрҫ” итеп йығыла.)*

**Айыҡбай** *(Ҡыйыҡбай ҡулындағы һауытты алып, яҙыуын уҡый).* “Нитхинол... Быяла, көҙгө, хрусталь таҙартыу өсөн...” Һай, әттәгенәһе, харап булды бит был... *(Ҡыйыкбайҙы һелкеткеләп.)* Эй, Ҡыйыҡбай, һин иҫәнме? Хәлең нисек?

**Ҡыйыҡбай** *(мығырлап).* М-м-м... Мин һинең и-и-иҫәнлеккә...

**Айыҡбай.** Уф, Аллам, һөйләшә лә алмай. Бөттө инде был, былай булғас. Аяғына баҫа алмаҫ. Хуш, бәхил бул, Ҡыйыҡбай...

**Ҡыйыҡбай.** И-и... иҫәнлеккә!..

**Айыҡбай.** Их, Ҡыйыҡбай, Ҡыйыҡбай... Эштәр көйләнә башлағас ҡына, әрәм булдың. Бына хәҙер бензинға ла хаҡ төшә башланы. Тиҙҙән араҡы ла осһоҙланыр. Вәт ул саҡта сифатлы хәмер генә эсер инең, исмаһам...

**Ҡыйыҡбай** *(ҡапыл йәнләнеп).* Ә? Нимә тиһең, Айыҡбай ағай?

**Айыҡбай.** Бензин хаҡтары төшкәс, араҡы ла осһоҙланыр, тим.

**Ҡыйыҡбай.** Ысынмы? Улайһа, бәхилләшмәй торайыҡ әле, Айыҡбай ағай. *(Һикереп тора.)* Яҡшы хәбәрең өсөн рәхмәт, Айыҡбай ағай. Йәшәргә стимул тыуҙы. Киттек, әйҙә!

**Айыҡбай.** Ҡайҙа?

**Ҡыйыҡбай.** Кризисты йыуырға!

**Айыҡбай.** Әйҙә улайһа, йығылып ятыуға ҡарағанда йөрөп ятыуың хәйерле. Кризис ваҡытында. Киттек, Ҡыйыҡбай ҡустым!

*Ҡултыҡлашып сығып китәләр.*

## *Хикмәте хәрефтә*

# КӨНДӘШТӘР

Кухнялағы көҙгөнән Кәрименең күҙенә күмәк кәзәләр күренде. Күршеһенең кәзәләре кәртәһендәге кишер, картуф, кәбеҫтәне кинәнеп кимерәләр. Кәримә көйәкөйә кескә кәртәгә килде. Кәзәләргә кәрәкте, кирбес-күҫәктәрҙе кәйелтте. Көр кәзәләр киреләнде.

Күтәрмәнән кәзәләрен күҙәткән Кәтибә күршеһе күргән күренештән кеткелдәп көлдө.

– Кәримәгә кәрәк, күркуль. Кисә кибеттә “күгәргән кәнфиттәрен кәрәкмәй”, – тип кәнфиттәрҙе кире кәштәгә кәйелткәйне. Күрмәгәнен күрһен!

Кәрименең Кинйәһе көнбайыштағы күршеһендә көн күрә. Кәрименең көүҙәһе килешле, күркәм, күк күҙле, күкрәге күтәренке. Көндәше Көнһылыу – Кәрименең кирәһе: көүҙәһе килбәтһеҙ, күрән күҙле. Кинйә Кәримәнән күптән китһә лә, Кәримәһен дә, Көнһылыуын да көн дә күргәһе килә. Кинйә кислотеп Кәримәгә килгәндә, күмәк кәзәләр кәртәлә Кәримәһенә киҙәнгәндәрен күрҙе. Күтәрмәләге көйәнтәне кәзәләргә кәйелтте. Көйәнтә Кәримәһенең күкрәгенә кәйлекте. Кәримә Кинйәне көйҙә: “Кәкрегул, күр, көйәнтәнән күкрәгем күгәреп күпте”, – тип кофтаһын күтәреп күрһәтте.

Кинәт Көнһылыу, көндәшенә көйөп, күркә кеүек күкрәген кирәп килде.

– Кинйә, күҙеңде күгәртәм, көүҙәңде кәкрәйтәм, – тип көрәк менән киҙәнде.

Күпте күргән Кәримә көндәшенә көйәнтә кәйелтте. Китте көрәш. Көнһылыу күршеһенең күҙе Кәрименекеләй күгәрҙе. Көндәштәрҙең көрәшен көлә-көлә күтәрмәнән күҙәткән Кәтибәнең Кирәйе командировканан килде.

“Күгәрсенем! Кәримә керһеҙ, көнләшмә. Көнһылыуы көнләшһен. Кирәйе көн дә Кәрименең кәртәһендә. Кисә кис Кәримәне күтәргән килеш көлөшә-көлөшә килгәндәрен кәртәнән күҙәттем. Күптән күҙгә, күрше-күләнгә күренмәй кискеһен кәбәндә, кәртәлә күрешәләр.

Кесаҙна көндө Кинйә кире Кәримәһенә килде. Күршеләр, көндәштәр килештерәләр.

**Зөлфирә МӘХИЙӘНОВА.**
Әбйәлил районы.

# Кәтмән

Көҙҙөң матур сағы. Әбей менән картуф ҡаҙабыҙ. Картуфтың уңыуына, ҡаҙ йомортҡаһындай эре бүлбәләренә һөйөнәбеҙ.

– Ай-һа-й, картуф тубырлашып ята, – тип һоҡлана әбейем, аптырашҡа ҡалып. – Уңыштан күрше-күләнгә кәтмән өләшергә кәрәк!

– Кәрәк булғас, бирәйек. Шул хәтлем картуфты ҡайҙа ҡуябыҙ? Ашатырға мал-фәлән юҡ, – тип һүҙҙәрен хуплайым.

– Кәтмән күләме бер биҙрә, – тиҙәр.

– Иң яҡын, иң ҡәҙерле күршеләребеҙ – өсәү. Тимәк, өс биҙрә бирәбеҙ!

Үҙем эстән генә һанайым: “Егерме биш биҙрә ҡаҙҙыҡ, шунан өс биҙрәне алдыҡ... О-о-о, ҡалғаны әбей менән икебеҙгә баштан ашҡан!”

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ. Кәтмән бүрысын ниәт иткән күршеләргә атҡарып та ҡуйҙыҡ. Тоҡтарҙағы картуфты мөгәрәпкә төшөргәнсе елләтергә тип, балконға һалып торҙоҡ.

Бер нисә көндән айырым йәшәп ятҡан улыбыҙ киленде эйәртеп килеп инде. Һирәк-мирәк булһа ла хәл белешеп торған балаларың – үҙе бер һөйөнөс. Баллап-майлап, сәй эстек.

Киленкәйебеҙ – ифрат һиҙгер ҡатын. Төшкән бит күҙҙәре балкондағы тоҡтарға, ундағы картуфты ла асып ҡарап өлгөргән.

– У-у, ҡәйнә, картуфығыҙ ҡайһылай уңған, үҙе эре! – ти, тоҡтарға ымлап. – Беҙ ни, эштән бушап, тәки кеше ыңғайына картуф ултырта алманыҡ. Вәзир, һатып алайыҡ, ти ҙә ул. Аҡса яғы наҡыҫыраҡ...

Киленебеҙҙең йөҙөнән мәхрүм ҡалыу киәфәттәре йүгерҙе, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, алмаш-тилмәш беҙгә ҡараны. Йәлләтергә итә. Һәләк зирәк аппағыбыҙ. Андырға, берәй нәмә эләктереп ҡалырға тиһәң, һайыҫҡан һымаҡ...

“Ай, эттәгенәһе, – тип уйлайым.– Бирмәһәң, ҡайным һаран, ти бит инде. Йомартланып, әбей артығын ысҡындырып ебәрмәһә ярар ине”.

Алдан алдырмаҡсы булып, һүҙгә ҡушылдым:

– Бирәйек балаларға берәй тоғон. “Картуф ултыртманыҡ”, – тиҙәр ҙә. Килен дөрөҫ уйлай, кәтмән үҙ балаларыбыҙҙың да эсен тишмәҫ.

– Бер тоҡ ни... Э-э-э... Бирғәс, икене бирәйек!

Шайтан алғыры, тоҡ һанын арттырып ебәрҙе бит әбей! “Бигерәк йоҙаҡһыҙһың шул”, – тип уйланым да ауыҙҙы шып йомдом. Ҡаршы төшһәң, улар өсәү. Аҙсылыҡ күпселеккә буйһона. “Ярай, ун ике биҙрә картуфыбыҙ үҙебеҙгә ҡала”, – тип уйлап, үҙемде тынысландырҙым. Ҡыш буйы әбейем менән икәүләшеп түшәмгә текәреп ятаҫаҡбыҙ.

Шулай картуфҡа кинәнеп, хәсрәтһеҙ генә йәшәгәндә, сиған бисәләре килеп инмәһенме!

– Үткәндәрегеҙҙе, киләсәгегеҙҙе әйтәбеҙ, – тиҙәр.

– Үткәндәрҙе беләбеҙ, киләсәкте күрәбеҙ, ана, зыярат эргәлә генә, – тим тегеләргә. – Аҡса юҡ, пинсиә алырға йыраҡ әле...

Әбей ҙә ҡушыла, аҡсабыҙ юҡлыҡҡа ышандырырға тырыша. Әрһеҙ сиған берәҙәктәре ышанды, ти, ҡолаҡтарына ла элмәйҙәр. Бер нахалы бөгөн генә мөгәрәптән килтергән бер биҙрә картуфты күреп тә ҡалған.

– Картуфығыҙға һалам кәртте! – тип һағыҙаҡ һымаҡ йәбеште. Инде тегеләрҙе ҡыуып сығарайым тип уҡталғайным, әбейем килеп ҡыҫылды:

– Ҡуй, бабай, был хәшәрәттәрҙән ҡотола алмабыҙ. Һалһындар кәрттәрен!

– Сиғандарға ла кәтмән эләкте, – тип көлдөм ахыр сиктә.

Тағы мөгәрәпкә юл тоттом. Һуңғы тоҡ картуфты арҡаға йөкмәп ҡайттым. “Аҙаҡҡы аҙыҡ – татлы”, – тип картуф хәлен аңлатып бирҙем әбейгә.

– Ата-а-аҡ, бөттө ләме ни? Орлоҡто һатып алабыҙмы шунан?

Белә күрә бот сабып аптырай, әйтерһең, бер мөгәрәп картуф ҡаҙып алған!

– Кәтмән кәрәк булған кеүек, орлоҡ та кәрәк! – тинем әбейҙе сәмләндереп, эске ҡылдарын сиртеп...

***

Самаһыҙ кәтмән өләшһәң, шулай ҙа була икән.

**Исмәғил ҒИМРАНОВ.**
Учалы ҡалаһы.



**Леонид Соколов – Өфөлә йәшәүсе билдәле урыҫ шағиры, “Кумир”, “Где вы были вчера?”, “Счастливчик” , “1001 прокол” һәм башҡа әнә күҙәк ҡыҫҡа, әммә беҙ күҙәк осло сатира һәм юмор китаптары авторы. Түңәрәкләп әйткәндә, “ҡыҫҡалыҡта оҫталыҡ” тигән хаҡ һүҙҙәрҙе үҙенсәлекле таланты менән раҫлап-иҫбатлап ижад итеүсе әҙип. Урыҫ теленең байлығын, тапҡырлығын файҙаланып, көлкөгә-шаянлыҡҡа бороп, көтөлмәгән әйтемдәр тыуҙыра, кәзә ҡойроғондай ҡыҫҡа шиғырҙарға әүерелдереп, уларға яңы мәғәнә бирә. Уҡығандар күҙенә әләкһә, тыңлағандар ҡолағына ишетелһә, улар халыҡ араһында яңыса яңғыраш таба.**



***

*Япондарҙа ҡатын-ҡыҙҙар*
*Резина – иҫ китмәле:*
*Һис өрмәйҙәр, сөнки улар*
*Ирҙә өрә үҙҙәре...*

***

*Хөкөм ителгән Иванды*
*Дуҫы яклап ҡараны:*
*“Нисек йөрөтһөн буш кеҫә,*
*Ул бит кеҫә ҡарағы!”*

***

*Батарея үтә һалҡын:*
*Фатирҙа йылы сак-сак.*
*Уның ҡарау, сантехниктар*
*Кеҫәһе йылынасаҡ.*

***

*“Аңламайбыҙ”, тигән һорау*
*Кергән халыҡ башына:*
*“Ниңә махсус эш хаҡы бар,*
*Махсус дача, машина?”*

***

*Иртән, көндөҙ туйынырға*
*Юҡ икән бина башҡа:*
*Кафе, буфет һәм ресторан –*
*Бары ла киске ашҡа!*

***

*Бүләк иттеләр ҡараүат,*
*Бигерәк һәйбәт нәмә:*
*Илебеҙгә өп-өр яңы*
*Кадрҙар әҙерләргә.*

***

*Кока-колаһы маҡтайҙар,*
*Юҡ, арттырмай күәтте.*
*Ун тапҡырға көс-дәрт арта*
*Эсһәң әсе күәсте.*

***

*Алтын ҡуллы булған икән*
*Беҙҙең атай-бабайҙар,*
*Тик бер балта ярҙамында*
*Ниндәй йорттар һалғандар!*

*Хәҙер ҡайһы бер оҫталар,*
*Гүйә, ҡулһыҙ кешеләй:*
*Ҡорал менән башҡарғаны*
*Тупаҫ балта эшеләй.*

***

*Үҙ талантын күмеп ҡуйғас,*
*Булды бүтән эш башларға:*
*Хәҙер көн-төн сокор ҡаҙый*
*Ҡәләм менән башҡаларға.*

***

*Төтөн ҡапланһа өйҙө,*
*Йыйнолде һәм дә берҙе.*

*Мал юғалһа бер көндө,*
*Йыйнолде һәм икене.*

*Эсең борһа бик ҡеслө,*
*Йыйноль менән өслөнө.*
*Һиҙһәң газдың сыҡҡанын,*
*Йыйноль һәм дә дүрт һанын.*

*Ниңә әле һөйләйем*
*Донъяның насар яғын?*
*Шатланмаһа, ватылмаһа,*
*Теүәл булһа йорт-малың, –*
*Табыштарың өйгә килер,*
*Тик табип һис булмаһын!*

Риф МИФТАХОВ
тәржемәләре.







**– Шайтан алғыры! Машинабыҙҙы урлап киткәндәр...**
– Чёрт побери! У нас машину угнали...




Р. ЮНЫСОВ

# ГАРАЖ МАЖАРАЛАРЫ

Яңы йылды һәр кем үҙенсә каршылай, шатлыктары ла төрлө: кемдер яңы фатир ала, икенселәр малтыуар яңырта. Минең дә һөйөнөр сәбәбем бар: нәкәнис, ҡырҡ йыл буйы иҫән-имен торған гаражыма яңынан аренда килешеүенең документтарын алдым.

Алыуын алдым да бит, ә бына бер йыл буйы барған был "көрәш"тә ағарған сәстәрҙе яңынан ҡарайтып та, бөткән нервыларҙы ҡабаттан ҡайтарып та булмаҫ шул. Хәйер, был бер минең генә иңгә төшкән бәлә түгел. Миндәйҙәр – меңдәр...

Былтыр аренда килешеүен яңыртыу тураһында ер бүлеү комитетына ғариза яҙғас, минең ҡулға егермеләгән пункттан торған ҡағыҙ тотторҙолар.

– Мәгеҙ, ағай, ошо документтарҙы йыйып бөткәс килерһегеҙ, – тине ҡалын быяла артында ултырған биҙәнгән тутыйҡош.

– Былар бит миндә бөтәһе лә бар, – тип аңлатам.

– Юҡ, яңынан алырға кәрәк, – ти был сибәркәй.

Бына шулай башланып китте минең мажаралар...

Тәүге пунктты үтәргә ҡаланың архитектура идаралығына киттем. Ҡарарҙы ике ай тигәндә саҡ-саҡ яңыртып, 450 һумды алдарына һалғас ҡына ҡағыҙҙы алдым. Баҡһаң был, минең нисә йылдар торған гаражым өсөн урынды ҡайтанан бүлеү тураһында ҡарар икән.

Уны тотоп, ер бүлеү комитетына йүнәлдем. Бүлмәнән-бүлмәгә сираттарҙа йөрөп, аҡса түләй-түләй, тындар ҡыҫыла торғас, бер ҡосаҡ ҡағыҙҙар алып, ҡарар проекты төҙөүсе егеткә килтереп тапшырҙым.

– Ике айҙан килерһегеҙ, бына һеҙгә ҡағыҙ, 900 һумды кассаға түләгеҙ, – тип "шатландырҙы" ул. Ни хәл ҡылмаҡ кәрәк – түләнем.

Ике айҙан һуң килһәм, егетең күҙ ҙә йоммай, эле әҙер булмауын һөйләй. Беҙ ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел.

– Ҡустым, минең ете ай буйы йөрөп, ете мең һум түләп йыйған ҡағыҙҙарҙы тапмаһаң, – тинем, тегенең күҙенә ҡарап, – мин һине судҡа бирәм!

Бер айҙан, ниһайәт, ҡарар проектын эшләп бирҙе егетең. Аҙыраҡ ҡурҡытыуҙың да файҙаһы бар икән.

Киренән ҡарар проектын тотоп, кәрәкле ойошмаларҙың ризалыҡ имзаларын йыйып килтерергә тура килде. Түрәләр ултырған бүлмәләрҙе үтеп бөткәнсе ярты йылда минең ағарған сәсле башымдан ниндәй генә уйҙар үтмәне.

Уның менән генә бөтһә икән!.. Әҙер ҡарар проектын алып ерҙе теркәү өсөн кадастр тигән урынға барырға тейешмен икән. Тағы бер ай уҙҙы, ниһайәт, имза ҡуйып, документтарҙы кире бирҙеләр.

Ошо мөғжизәләрҙе уҙып алған аренда килешеүен ҡулға әләктергәс, ҡыҫҡырып йырлап ебәрҙем.

Быйылғы Үгеҙ йылы миңә тағы ла ниндәй шатлыҡтар килтерер икән? Ун йыл элек алған алты сутый ерҙә бәҙрәфле баҡсам бар. Ағарған сәстәрем ҡойолоп бөткәнсе шуның да хужаһы була алһам, Үгеҙ йылы бик уңышлы булды, тип "Һәнәк" уҡыусыларына тағы ла шатлығымды һөйләрмен әле.

**Дим ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**
Өфө ҡалаһы.

# Туҙға яҙмағандарҙан

(һөйләшеүҙәрҙән)

**✦ Сәрүәретдинов әллә үлгәнме, бик маҡтайҙар?**

**✦ Юбилейында уға мең һум бүләк иткәйнем, ә ул, мәртәт, минекенә биш йөҙ генә бирҙе. Өҫтәүенә сусҡа урынына эсте.**

**✦ Хөсңә ҡарсыҡ биш гектар пай еренән тәүге уңыш алды: һуңғы ун һигеҙ йылда шунда үҫкән йәш ҡайындарҙан һигеҙ пар миндек бәйләп һатты.**

**М. ҒИЛӘЖЕВ ишетте.**

# Беҙҙең Һәнәк




*Көлдөргәнсе илаткан да,*
*Илатҡансы көлдөргән дә*
*Беҙҙең Һәнәк инде ул,*
*Уға көлөү – үҙе һөнәр*
*Үҙе хәләт инде ул.*

*Йүнһеҙҙәрҙән көлөү, тиһәң,*
*Һәнәк – һәләк инде ул.*
*Һәр кемде көлдөрә алыу*
*Бик шәп һәләт инде ул.*

*Донъя йәмен ебәреүсе*
*Сүп-сар, кәбәк инде ул.*
*Көн дә шуларҙан таҙартҡан –*
*Уңған Һәнәк инде ул.*

*Ямандарға көн күрһәтмәй,*
*Һәнәк – Һәнәк инде ул.*
*Интернет заманында ла*
*Һәнәк кәрәк инде ул.*

**Гөлфиә ЮНЫСОВА.**

**"ҺӘНӘК" журналына яҙылығыҙ! Уҡығыҙ! Көлөгөҙ!**

# Көлгәнгә – көлкә

☺☹☺

Бер аяғына быйма, икенсеһенә итек кейгән әбейҙән кешеләр аптырап һорай икән:

– Әбей, ниңә улай кейенеп алдың?

– Әле генә радионан: “Урыны менән ямғыр, урыны менән ҡар көтөлә”, – тинеләр бит.

☺☹☺

Бабай күршеһенән:

– Хәйруллин, һин иптәштәрең менән һөйләшкәндә түрәгеҙҙе тәнҡитләнең, ә йыйылышта маҡтаның. Быны нисек аңларға?

– Мин ҡабатларға яратмайым.

☺☹☺

– Врач килде, – ти ҡатын етәксе булып эшләгән иренә.

– Бөгөн мин сирләйем, бер кемде лә ҡабул итмәйем.

☺☹☺

Судта:

– Иреңдең башына тәрилкә менән һуҡҡанһың икән. Нисек ҡыҙғанманың?

– Йәлләмәгән ҡайҙа ул! Йәлләнем, яңы ғына һатып алған тәрилкә ине бит. Селпәрәмә килде лә ҡуйҙы.

☺☹☺

– Атай, опера нимә була ул?

– Опера ул, улым, шундай нәмә: берәү икенсеһен хәнйәр менән сәнсә, ә тегеһе, йығылып урынға, йырлап тора.

☺☹☺

– Нәфисә еңгә, был кемдең картинаһы? Шишкиндыҡымы?



– Әстәғәфирулла! Ни эшләп Шишкиндыҡы булһын, ти? Үҙемдеке! Өсөнсө көн генә магазиндан һатып алып ҡайттым.

☺☹☺

– Ниңә машинаңды кәрәккәнгә лә, кәрәкмәгәнгә лә ҡыуаһың?




– Ни эшләйем һуң, врач күп йөрөргә ҡуша бит.

☺☹☺

Элекке заманда, уҡытыусылар етешмәгәнлектән, берәүҙе балалар уҡытырға ҡушҡандар. Бер ай эсендә ул бөтә хәрефтәрҙе үтеп бөткән дә:

– Биргән хәрефтәрегеҙҙе үтеп бөттөм. Булһа, тағы ебәрегеҙ әле, – тип РОНО-ға шылтырата, ти.

☺☹☺

Мәктәп директоры, тарих уҡытыусыһын саҡыртып алып:

– Ниңә уҡыусыларығыҙға гел “өс” кенә ҡуяһығыҙ, тарихты үҙләштерә алмайҙармы ни? – тип һораған.

Уҡытыусы уға:

– Дөрөҫөн әйткәндә, директор иптәш, тарихты мин үҙем дә “өслө”гә генә беләм шул, – тип яуап ҡайтарған.

☺☹☺

Яңыраҡ өйләнгән ир иптәшенә зарлана:

– Туйға тиклем минең ҡатын рауза гөлө кеүек ине. Тик раузаның энәле булғанын онотҡанмын. – Туйҙан һуң бер ай үтеүгә кактусҡа өйләнгәнемде аңланым...


**ҺӘНӘК**

**№ 1 (1196)**

ISSN 0208–094X

**“ХЭНЭК” (“ВИЛЫ”)**
Ежемесячный журнал сатиры и юмора на башкирском языке.
**Издается с сентября 1925 г.**

Журналды ойоштороусылар:
**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте.**

**Адрес редакции:** 450079, г. Уфа, ул 50-летия Октября, 13, “Хэнэк” (“Вилы”).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 272-91-02
Баш мөхәррир урынбаҫары 272-52-82
Бүлектәр 272-87-43, 272-52-82

**Подписка на журнал принимается без ограничений на всей территории страны.**

Беҙҙең сайт: henek.pressarb.ru **Индекс 73456**

**Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы.**

**Баш мөхәррир Марсель СӘЛИМОВ**



Мөхәрририәт һәм редакция советы:
**Александр АНДРЕЕВ (биҙәлеш бүлеге мөхәррире), Венер ИСХАҠОВ (өлкән мөхәррир), Риф МИФТАХОВ (әҙәбиәт бүлеге мөхәррире), Марат ӘМИНЕВ (яуаплы сәркәтип), Хәлил ӘХТӘМОВ (баш мөхәррир урынбаҫары), Артур ВАСИЛОВ, Мансаф ГИЛӘЖЕВ, Марат КӘРИМОВ, Рәсих ХАННАНОВ, Венера ХӘКИМОВА, Марат ӘБДҮШЕВ.**



Сдано в набор 11.12.08. Подписано к печати 13.01.09. Офсетная печать. Усл.-печ.л. 2. Уч.-изд. л. 3,56. Формат 70х100 1/16. Зак. № 3. Тираж 3891.

Корректор З. МАЗҺАРОВА

**Журнал зарегистрирован в Министерстве печати и массовой информации РБ. Свидетельство о регистрации № 687 от 15.12.1995 г.**

Цена в розницу свободная.


©“ҺӘНӘК”, 2009

Отпечатано в типографии ГУП “Издательство “БАШКОРТОСТАН”.

# Кәләсворд








**Горизонталь буйынса:** 1. Ғабдрахман Ҡадировтың ҡорос аты. 4. Уй йөрөтөп, һығымталар яһау. 7... Твен. 8. Иҫерек квадрат. 9. Хәрби буяу. 10. Электрлы балыҡ. 14. Генерал салбарындағы абруй билдәһе. 18. 1-се фото. 19. Көс һынашыу. 20. Финляндиялағы курорт. 23. Менделеев таблицаһындағы ағыулы газ. 24. Куба араҡыһы. 25. Ҡайнатылмаған компот. 27. Һалынған тыйыу. 29. 2-се фото. 32. Ҡазанда бар, Өфөлә юҡ. 34. Карап өсөн һуҡмаҡ. 35. Сәхнә хеҙмәткәре.

**Вертикаль буйынса:** 2. Балалар өсөн киножурнал. 3. Боронғо Греция философы. 5. Мумуның эйәһе. 6. Ассимметрик балыҡ. 11. 50-се йылдарҙағы Рәсәй мотоциклы. 12. Ҡатыҡ коктейле. 13. Операның сценарийы. 15. Ҡораллы фәрештә. 16. Банк штрафы. 17. Сальвадор Далиҙың ижад стиле. 21. Тамаша залындағы ҡат. 22. Джугашвилиҙың ҡушаматы. 25. Һәүкәштең һүҙе. 26. О.Бендерҙың хыялындағы ҡала. 27. Ырыуҙың шәхси билдәһе. 28. Цирк һикертмәһе. 29. Фотокорҙың ҡумтаһы. 30. Диңгеҙсенең төньяғы. 31. Футбол клубы, йәки аҡса бирәмеге. 33. Парикмахерға кәрәкле прибор.

**Хәлил ӘХТӘМОВ төҙөнө.**

## 12-се һанда баҫылған кәләсворд яуаптары

**Горизонталь буйынса:** 1. Стипендия. 9. Лото. 10. Евстигнеев. 11. Торт. 12. Атолл. 15. Астма. 16. Катод. 17. АК. 20. Рено. 23. Омар. 24. Иртыш. 27. Сэр. 28. Иврит. 29. Титр. 31. Марш. 33. Камин. 34. Виски. 35. Навои. 37. Диод. 38. Карбованец. 42. Артрит. 43. Миграция. 44. Аршин.

**Вертикаль буйынса:** 2. Тост. 3. Приз. 4. Нонет. 5. Идеал. 6. Торонто. 7. Понтиак. 8. Декларация. 12. Анкер. 13. Октан. 14. Лада. 18. Карт. 19. Кант. 21. Ефремов. 22. Останкино. 25. Транспортир. 26. Шишкин. 30. Репетиция. 32. Квартет. 36. Агат. 38. Киви. 39. Бриг. 40. Вира. 41. Ница.